ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

4-10 февраль (шаҡай) 2017

№5 (735)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өфөнән башҡа...**
бер ер ҙә кәрәкмәй миңә



5,6

**Олуғ ғалимыбыҙ әйткән һүҙ,**
йәки Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге



7

**Киләсәгебеҙгә спид түгел...**
һыра алкоголизмы янай



12

**Ҡәһәрләнгән фирғәүен,**
йәғни Ҡөрьәндә һөйләнгән өс мең йыл элекке ваҡиға тураһында



13

**ТВ-программа** 14

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Февраль башынан 31 мартҡа тиклем 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә (индекс 50665) ваҡытынан алда арзанраҡ хаҡҡа яҙылыу иғлан ителә, йәғни был осорҙа баҫмабыҙға яҙылыу 469 һум 92 тин, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II төркөм инвалидтары өсөн 423 һум 96 тин тәшкил итәсәк. Ә тәүге ярты йыллыкта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 февралгә тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлау мөмкинлегенә эйә (дүрт айға - 326 һум 26 тин).*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сәйәси ваҡиғалар бер-бер артлы үҙгәреп тора. Улар хаҡында һеҙ ҡайһы мәғлүмәт сараларынан ишетәһегеҙ? Уларҙың барыһы хаҡында ла белергә кәрәк, тип иҫәпләйһегеҙме?

***Урал МОСТАФИН, яҙыусы:*** Яңылыҡтар, сәйәси ваҡиғалар менән телевидение һәм радио аша танышыуҙы хуп күрәм. Хәҙер бит каналдар бик күп, шулар араһынан үҙеңдең донъяға ҡарашыңдан, "тын алышыңа", хәҡиҡәткә яҡыныраҡ булғанын һайлап алыу мөмкинлеге йәлеп итә мине. Әлбиттә, мөмкин тиклем гәзиттәрҙән дә уҡыйым, хәҙер бит интернеттан бөтөн гәзиттәр менән дә танышып сығырға була, тик баҫма матбуғаттың донъяла булып ятҡан яңылыҡтарҙан һуңыраҡ килеп етеүе генә уның файҙаһына түгел был йәһәттән. Гәзит-журналдарҙан күңел өсөн танһыҡ материалдарҙы яйлап, "тәмләп" ултырып уҡыу яғындамын. Сәйәси ваҡиғаларға килгәндә, улар бөгөн, ысынлап та, калейдоскоптағы кеүек үҙгәреп тора, уны үҙләштереп, анализлап өлгөрөп кенә ҡара! Шуға күрә, мин бая әйткәнсә, иң көнүҙәк бер нисә тематикаға ғына иғтибар бирәм, юғиһә, әлеге шул сәйәси буталыштарҙың уртаһында юғалып ҡалыуың да бар.

Әйткәндәй, бөгөн Евросоюз менән Америка сәйәсмәндәренең бар булған сәйәси уйындары фәҡәт Рәсәйгә ҡаҙалыу, уның ысынбарлығынан кер эҙләүгә генә ҡоролғанын яҡшы беләбеҙ бит, юғиһә. Был, йомшаҡ итеп әйткәндә, тамам бүкһетте. Сит ил етәкселәренең үҙҙәрен юғары вазифаларына ярашлы тота белмәүе, әйткән һүҙҙәренең осһоҙланыуы, ваҡсылланыуы, дөрөҫөн әйткәндә, ситән аша талашҡан баҙар бисәләре ҡылығын хәтерләтә түгелме? РФ Президенты В.В. Путин бик дөрөҫ әйтте бит: теләһә ниндәй уйҙырмалар уйлап сығарыусылар үҙҙәре ана шул уйҙырмаларында телгә алыныусы еңел тәбиғәтле фәхишәләргә ҡарағанда ла шаҡшыраҡ, тип. Шунан да дөрөҫөрәген әйтеүе ҡыйындыр. Шуға күрә мин сәйәсәтте хәҡиҡәткә тоғро, объектив кешеләр ауыҙынан ишетеүҙе хуп күрәм һәм донъя ваҡиғаларын һайланма рәүештә ҡарап өйрәнгәнмен. Үҙебеҙгә ҡағылышы булмаған сәйәси ваҡиғалар мине бик ҡыҙыҡһындырмай. Унан тағы ла бер үк хәбәрҙе күп сәйнәүҙе лә өнәп бөтөрмәйем. Мәҫәлән, Украина менән Сирия минең өсөн тап ана шундай сәйәси талаш объекты. Дөрөҫөн әйткәндә, Украинаны йыш телгә алып, беҙ уның ҡайһы бер йүләр "сәйәсмәндәре"нең үҙ баһаһын күтәреүгә булышлыҡ итмәйбеҙме икән, тип тә уйлап ҡуям. Әллә ни бик күҙгә элмәҫкә лә булалыр бит инде уларҙы. Сирияны ла күп тылҡыйбыҙ, туҡтауһыҙ ошо илгә матди ярҙам, шәфҡәтлелек акциялары хаҡында һөйләйбеҙ, журналистар ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйған репортаждар күрһәтәбеҙ, ә бына ундай ярҙамға мохтаждар үҙебеҙҙең илдә лә артҡандан-арта барыуын онотабыҙ. Был бит үҙебеҙҙәге ярлы йәшәгән халыҡ ҡатламының асыуын ҡабарта. Ә уларға кем ярҙам ҡулы һуҙыр һуң?..

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# СИТ ТАРАФТАРҘА, ЙӘШТӘРЕНӘ ҠАРАП,

## был милләттең киләсәге бар, тиһендәр...

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты 2016 йылда Рәсәйҙең классик юғары уҡыу йорттары араһында ун етенсе урынды биләгән. Юғары квалификациялы педагогтар әҙерләүсе уҡыу йортоноң республикабыҙ өсөн иң әһәмиәтле йүнәлештәренең береһе, ул, әлбиттә, башҡорт филологияһы. Университеттың ойошторолоуына 50 йыл тулған был көндәрҙә филология факультетында белем алған студенттар Айтуған Йәнбирҙин, Айбулат Сәсәнбаев һәм Байрас Азаматов менән әңгәмәләшеп алдыҡ.**



**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

12+

✓ *Һәр илдең сәйәсәте ул илдә йәшәүселәрҙең тормош кимәле һәм көнкүрешендә сағыла. Халыҡтың йәшәү кимәленән сығып, ил сәйәсәтенең уңышлымы-түгелме икәне тураһында үҙаллы ла бик яҡшы фекерләй алабыҙ, минеңсә.*



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮҘ АҠЫЛЫҢ МЕНӘН ЙӘШӘ...

***Рәйлә ВӘХИТОВА, "Мин илһөйәр" БР гражданлыҡ-патриотик тәрбиә биреү төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе урынбаҫары:*** Ниндәй заманда йәшәһәк тә, төрлө тетрәнеүҙәр, реформалар кисерһәк тә, халыҡтың көнкүреш кимәле борсолдорһа ла, бөтә эштәрҙе атҡарып сығырға тәүлегенә егерме дүрт сәғәт етмәй, тип зарланһаҡ та бөгөн беҙҙең алда һәр тарафҡа юл асыҡ. Хыялдарҙы тормошҡа ашырыу, шәхес булараҡ үҫешеү, һәләттәреңде камиллаштырыу өсөн бихисап мөмкинлектәр бар. Был мөмкинлектәр донъяуи проблемаларҙы ла еңелерәк үтеп сығырға форсат бирә. Әммә күптәр үҙ көсөнә ышанмай, үҙенең ҡулынан килерҙәй мәсьәләне лә икенсе кеше аша атҡарыу юлдарын эҙләй. Гел генә башҡа кешегә бәләнде һалып тороу ярамай, ул һинә бер, бәлки, ике тапҡыр ярҙам ҡулы һуҙырға мөмкин. Донъяла ниндәй генә ваҡиғалар булмай, һәр ваҡыт үҙ аҡылың менән йәшәргә, тырышып, ауырлыҡтарҙы үҙең еңеп сығырға, бөтә нәмәне анализлап, үҙең хәл итеп өйрәнергә кәрәк. Ҡул ҡаушырып ултырып, үҙ проблемаларыңды яҡындарың, дуҫтарың, таныш-белештәрең иненә аузарыу аҡылһыҙлыҡ билдәһе. Кеше үҙен үҙе булдыҡһыҙҙар рәтенә индереп, тормошҡа зарланып ултырырға түгел, ә сетерекле хәлдәрҙән сығыу юлдарын эҙләргә тейеш.

Бындай шәхесте тәрбиәләүҙә мөһим роль рухи тәрбиәгә бирелә, әлбиттә. Шулай ҙа үҙеңде дөрөҫ баһалай белеү ҙә мөһим, шунһыҙ ҙур еңеүҙәргә, маҡсатыңа өлгәшеү мөмкин түгел. Әлбиттә, үҙ бәсеңде төшөрмәйем тиһәң, бүтәндәргә лә тейешле кимәлдә ихтирам күрһәтеү кәрәк. Башҡорт халҡының менталитеты шулай, тура әйтеп өйрәнгәнбеҙ. Ҡыҙыу баш менән тотҡан урында һындырып, кешене рәнйетеп ҡуймаҫ өсөн йәштәр ололарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалырға өйрәнһен ине. Ҡәнәшле эш тарҡалмаҫ, тип юҡҡа ғына әйтмәгән боронғолар. Беҙ ғүмер буйы был донъяла кеше булыуыбыҙҙы иҫбатлап йәшәйбеҙ. Бары тик үҙ бәсен белгән, башҡаларҙы кәмһетмәгән, үҙ проблемаларын үҙе хәл итеп өйрәнгән шәхес кенә тормошта уңыш ҡаҙана ала. Миллләттәштәргә бына ошо фекерҙәрҙе еткереп, йәштәрҙе тап шундай Кеше итеп тәрбиәләйек, тип өндәшкем килә.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Сәйәси ваҡиғалар бер-бер артлы үҙгәреп тора. Улар хаҡында һеҙ ҡайһы мәғлүмәт сараларынан ишетәһегеҙ? Уларҙың барыһы хаҡында ла белергә кәрәк, тип иҫәпләйһегеҙме?*




**(Башы 1-се биттә).**

***Ринат ШАЙБӘКОВ, Белорет районы Йөйәк урта мәктәбенең тарих уҡытыусыһы:*** Минә, уҡытыусы кешегә, яңылыҡтар менән хәбәрҙар булып бармайынса һис мөмкин түгел. Беҙҙең балалар хәҙер бик күпте белә, көнө-төнө интернетта ултыралар. Ҡайһы саҡ уларҙың теге йәки был сәйәси ваҡиға тураһында мәғлүмәтлелеген тикшереп ҡарау маҡсатын да ҡуям. Уларҙың уҡытыусыларына теләһә ниндәй һорау биреүе ихтималлығын да онотмайым. Бына шулай иғтибарҙы заман пульсында тоторға тура килә лә инде. Яңылыҡтар һәм сәйәси ваҡиғаларҙы күбеһенсә интернеттан - "Сәйәси яңылыҡтар" сайтынан күҙәтеп барам, был рубриканың саманан сыҡмауы, объективлығы, тел-стиль үҙенсәлеге оҡшай.

Сәйәси хәлдәр тураһында абруйлы сәйәсмәндәр, депутаттар, күҙәтеүселәр һәм журналистар ҡатнашлығында алып барылыусы түңәрәк ҡорҙар, аналитик программаларға өҫтөнлөк бирергә тырышам, сөнки хәҡиҡәт бәхәстә тыуа, тиҙәр бит. Ҡайһы ваҡиғаға, яңылыҡҡа ниндәй төҫ һәм йүнәлеш биреүҙә уларҙың фекере мөһим минең өсөн. Айырыуса Рәсәй каналынан журналист Владимир Соловьевтың түңәрәк ҡорҙары оҡшай. Беҙҙең Башҡортостан телевидениеһына ла кәрәк ине ана шундай абруйлы берәй сәйәси тапшырыу. Гәзиттәр уҡыусы ҡулына һуң килеп етһә лә, уның биттәрендә лә аҙналыҡ сәйәси күҙәтеү биреү бер ҙә зыян итмәҫ ине. Киреһенсә, ул уҡыусыны теге йәки был ваҡиғалар өйөрмәһендә дөрөҫ йүнәлеш табырға, тейешле һығымталар яһарға булышлыҡ ҡына итәсәк, тип уйлайым.

Әлбиттә, шуныһы ла бар: күңел талабы юҡ икән, эше, көнкүреше сәйәсәткә һис бәйле булмаған кешеләр өсөн донъя хәлдәренең барыһын да белеп барыу мотлаҡ та түгелдер. Уның ҡарауы, "Киске Өфө", мәҫәлән, рухиәтебеҙ ихтыяжына яуап бирерҙәй йөкмәткеле мәҡәләләре, алдынғы замандаштарыбыҙ менән әңгәмәләре һәм тарихи очерктары аша үҙенә йәлеп итә. Гәзит майҙанын булыр-булмаҫ сәйәсәт менән тултырыу был гәзиткә төҫ тә булмаҫ ине, тип уйлайым. Сәйәсәт, ысынлап та, көн дә йөҙөн алыштыра, төрлө һүрәткә керә, уның ярҙамында кеше тәрбиәләп булмай. Ә "Киске Өфө"нөң маҡсаты юғарыраҡ: ул милләттәштәрендә рух тәрбиәләй, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр сафын арттырырға тип тырышҡан кеүек.

***Фирүзә АБДУЛЛИНА, шағирә, башҡорт теле уҡытыусыһы:*** Минеңсә, һәр кеше үҙ заманы ваҡиғалары, шул иҫәптән сәйәсәт хәлдәре менән ҡыҙыҡһынып йәшәргә тейеш. Беҙ башҡорт телендәге бөтә баҫмаларҙы ла алдырабыҙ тиерлек. Ләкин иң беренсе булып яңылыҡты шулай ҙа интернет, радио, телевидение аша беләбеҙ. Унан һуң инде тәмләп, һәр һөйләмен үтеп инеп, гәзит-журналдар уҡыйбыҙ. Тимәк, бөгөн беҙ гәзит-журналдарҙы яңылыҡтарҙы белеү өсөн генә алдырмайбыҙ. Баҫма матбуғаттың был йәһәттән функциялары бер аҙ үҙгәрә төштө. Әйтеүемсә, яңылыҡтарҙы теләһә ниндәй сығанаҡтарҙан, хатта ҡулыңдағы телефон аша ла белергә була. Гәзит-журналдар иһә түгән телебеҙҙе йәшәтеү, милли проблемаларыбыҙҙы уртаға һалып һөйләшеү, аралашыу сараһы булараҡ мөһим беҙҙең өсөн, сөнки гәзит биттәрендәге материалдарҙы башҡаса бер ҡайҙан да алып булмай. Ләкин был һис тә баҫма матбуғатта сәйәсәт темаһы төшөп ҡалырға тейеш тигәнде аңлатмай, ә бына шул сәйәси ваҡиғаларға ҡарата билдәле шәхестәрҙең уй-фекере менән таныштырып барыу мөһимдер, тигән фекерҙәмен. Уларҙың фекерҙәре менән үҙебеҙҙекен сағыштырып, ниндәйҙер һығымта яһарға мөмкин.

Сириялағы һуғыш, Украинаның хаттин ашыуҙары, Америкала президент һайлауҙар, спортсыларҙы туҡтауһыҙ допинг ҡулланыуҙа ғәйепләү тураһында көнө-төнө барған телетапшырыуҙар беҙҙең халыҡтың иғтибарын илдең эсендәге проблемаларҙан ситкә алып китеү өсөн генә эшләнә кеүек. Шуға күрә, ошо хаҡта һөйләй башлаһалар, телевизорҙы һүндереп ҡуйырға ла тура килә, ялҡытты! Рәсәй һәр ваҡыт ситилдәргә гуманитар ярҙам күрһәтергә ынтыла. Бер яҡтан, бик яҡшы эш. Ләкин, икенсе яҡтан, быға йән көйә: Сирияның да бер заман изгелектәребеҙҙе онотоп, дуҫлыҡҡа (үкенескә, күберәк бер яҡлы дуҫлыҡҡа) хыянат итмәҫ, тип бер кем дә ышандыра алмай. Тап ана шундай ут күршеләрҙең яуызлығынан яфа сигергә тура килә лә инде бөгөн. Өҫтәүенә, үҙебеҙҙең ил халҡы хәйерсе хәленә төштө, бик күптәр ярҙамға мохтаж. Уларға кем ярҙам итер? Ауылда эш юҡ, бөтә ир-ат ситкә эшкә йөрөй, балалар атайҙарын күрмәй үҫә. Эшләп тә эш хаҡын ала алмай, алданып йөрөүселәр етерлек. Беҙҙең ауыл советы биләмәһенән генә лә бер нисә йәш ир-егеттең төҙөлөштә үлеп ҡалыуын да өҫтәһәң, бөтөнләй сараһыҙлыҡ тойғоһо солғап ала: уларҙың ғаиләһен кем ҡайғыртыр хәҙер? Шуларҙы уйлай башлаһаң, сәйәсәт менән ҡыҙыҡһынмауың хәйерле кеүек. Ил башлыҡтарын тыңлаһаң, шул тиклем дөрөҫ һүҙҙәр һөйләйҙәр һымаҡ, ә ҡайҙа һөҙөмтәһе? Нишләп йылдан-йыл йәшәү ҡатмарлаша ғына бара һуң ул? Бигерәк тә йәштәр йәл: фатир алыу фантастик хыялға әүерелде, ялсыз эш табыу - ҡатмарлы, социаль яҡлауҙар юҡ кимәлендә. Ғүмер буйы икәүләп эшләп тә, үҙебеҙҙе лайыҡлы ҡартлыҡ менән тәьмин итә алмауыбыҙ үкенесле... Әйткәндәй, сит илдәр асыҡтан-асыҡ көлә бит инде хәҙер был хәлдән. Яңыраҡ ҡына интернетта уҡыным: Доналһд Трамптың кәңәшсеһе, әллә йәлләп, әллә мыҫҡыл итеп, Рәсәй халҡы астан үлмәҫ өсөн ҡар ашарға ла әҙер, тип юҡҡа ғына белдермәне, йәмәғәт...

Һәр илдең сәйәсәте ул илдә йәшәүселәрҙең тормош кимәле һәм көнкүрешендә сағыла. Халыҡтың йәшәү кимәленән сығып, ил сәйәсәтенең уңышлымы-түгелме икәне тураһында үҙаллы ла бик яҡшы фекерләй алабыҙ, минеңсә. Бер ниндәй Жириновскийҙың да, Соловьевтың да, фәлсәнәтарҙың да сәйәси "һағыҙ" сәйнәүе кәрәкмәй...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә тыуымды арттырыу мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, 2013 йылдан Башҡортостанда халыҡтың тәбиғи артымы 21 меңдән ашыу кеше булған. Былтыр тыуым мең кешегә 13,7 тәшкил иткән. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, киләсәктә экстракорпораль аталандырыу технологияларын ҡулланып, юғары технологиялы ярҙам күрһәтеү күләмен арттырыу һәм нәҫел сирҙәре булған ояраҡта генетик боҙолоуҙарҙы асыҡлау өсөн Геномлы медицина үҙәген булдырыу күҙаллана.

✓Быйыл Башҡортостанда түлһеҙлектән яфаланған 1,5 мең ҡатын-ҡыҙ мотлаҡ медицина страховкаһы полисы иҫәбенә экстракорпораль аталандырыу процедураһын үтә. Дөйөм алғанда, республикала 2,7 мең ҡатын-ҡыҙ ошо процедураға сиратта тора. ЭКО процедураһы бушлай, мотлаҡ медицина страховкаһы аҡсаһы иҫәбенә үҙгарыла. Документтар түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 2, 1-се поликлиника, 214-се бүлмә.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы 10 һәм 11 февралдә "Рәсәйҙең саңғы юлы - 2017" ярыштарына ҡушыла. Мәғлүмәттәргә ярашлы, быйыл ярышҡа 10 меңдән ашыу саңғы спортын үҙ итеүселәр сыға. Ярыштарҙың төп старты 11 февралдә "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексында көндөҙгө 2-лә башлана. "Рәсәйҙең саңғы юлы - 2017" ярыштарында ҡатнашыу өсөн райондың физик культура һәм спорт комитетына ғариза яҙырға кәрәк.

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Башҡортостандың 100 исеме" күләмле телемарафоны барышында интернет аша тауыш биреү тамамланды. Билдәләнеүенсә, махсус комиссия һайлап алаcаҡ исемлектәге йөҙ күренекле эшмәкәр хаҡында документаль фильмдар һәм тапшырыуҙар әҙерләнәсәк.

✓Өфөлә "Ата-әсәләрҙең Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу көнө" акцияһы Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатында (Степан Кувыкин урамы, 100) уҙа. Акцияла уҡыусыларҙың ата-әсәләре, башҡарма власть органдары һәм киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре ҡатнаша. Ҡатнашыу өсөн ғаризаны 6 февралдә киске сәғәт 5-кә тиклем Ivanova.IV@bashkortostan.ru электрон адресына ебәреү зарур.

✓ Ғалимдар һуңғы йылдарҙа яман шеш эпидемияһының айырыуса көсәйә барыуы хаҡында саң ҡаға. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, 2035 йылда йыл һайын 24 млн кеше ошо сиргә дусар буласаҡ.



БЫЛ АЙҘА...

**Сонтор ай - шаҡай ҙа йыл көндәрен һанай башланы. Ҡыш ғүмере икенсе яртыһына ауышып, көндәр оҙайыуға табан бара башлай хәҙер - шул йылыта бер аҙ күңелде. Юғиһә, быйылғы ҡыш, ҡарға йомарт булһа ла, оҙайлы һыуыҡтары менән дә сәңкетеп алғыланы. Әсе елле селләләрҙе уҫал февраль дә күрһәтәсәк әле, тик барыбер иртәнсәк тороп эшкә барғанда, юл-аяғы яҡтырҙы, баш осонда, ҡайҙалыр шыршы-ҡарағайҙар араһында һуҙып-һуҙып буҙ турғай һайрай башланы...**

# ИЛЕН ҺАҠЛАҒАН - КӨН КҮРГӘН

Айбарлығын шаҡай бынан 74 йыл элек немец илбаҫарҙарына ла таныҡкан, һай, афарин! 1943 йылдың **2 февралендә** совет ғәскәрҙәре Сталинград һуғышында фашистарҙы тар-мар итә. Шуға ла хәҙер был көн Хәрбиҙәр даны көнө тип йөрөтөлә. Донъялар тыныс торһон, һуғыштар була күрмәһен, тип теләйбеҙ ошондай көндәр билдәләнгәндә. Тик шулай ҙа... Һуғыш булмаһа ла халыҡ ҡырғындан ҡырылыр, тигән. **4 февраль** Бөтөн донъя күләмендә яман шеш сирҙәре менән көрәш көнө тип юҡҡа ғына иғлан ителмәгәндер, күрәһең. Ер йөҙөндә йыл һайын 8 миллионлап кеше ошо афәттән донъя ҡуя. Ғалимдар һуңғы йылдарҙа яман шеш эпидемияһының айырыуса көсәйә барыуы хаҡында саң ҡаға. Бөтөн донъя Һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, 2035 йылда йыл һайын 24 млн кеше ошо сиргә дусар буласаҡ. Рәсәй буйынса әлеге ваҡытта ошондай сирле 3 млн самаһы кеше иҫәптә тора. Һүҙ ҙә юҡ: кешелек үҙ-үҙенә ҡәбер ҡаҙый, сөнки яман шеш сиренең төп сәбәбе кеше факторына бәйле. Экологияны беҙ үҙебеҙ бысратабыҙ, эт ашамаҫ "аҙыҡ-түлек"те шулай уҡ үҙебеҙ етештерәбеҙ. Унда нимә генә ҡушып бөтмәйҙәр! Кешелек уйлау, ҡурҡыу һәләтен юғалтты. Донъяға ул мәңгегә тыуғанмын, тип хис итә үҙен. Уға фәҡәт аҡса, байлыҡ, өҫтәмә табыш кәрәк.

Рәсәй фәне көнө **(8)** ошо юҫыҡта ниндәйҙер пародия һымаҡ тойолоп китә. Көнө бар, ә фәне ҡайҙа? Үткән быуаттың 90-сы йылдарында күпме талантлы ғалимдар илде ташлап китте. Фәнебеҙҙең аяҡҡа баҫа алмауы, яңы асыштар яһамауы, эйе, аҡсаға ла бәйлелер, икенсе яҡтан, дәүләт ҡыҙыҡһыныуы булмағас, ғалимдарҙа ла дәүләт мәнфәғәтендә фиҙаҡәрлеккә ынтылыш һүнеп ҡалған. Йәш ғалимдар әҙерләнмәй. Әҙерләнер ине, ил мәғарифының ҡаҡшамаҫ кеүек тойолған нигеҙе емерелде. Аяҡ-ҡулы менән БДИ-ға бәйләнгән мәктәп программаһы көн дә күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә үҙгәреп торған яңы технологик мөмкинлектәрҙе үҙләштереү лә, күҙәтеп бара ла алмай.



Граждандар авиацияһы көнө **(9)** лә бер осо менән әлеге фән һәм компетентлыҡ мәсьәләһенә ҡуҙғатып ҡуйғандай. Пассажирҙар самолеттары ниңә бик йыш һәләкәткә осрай? Самолеттар иҫкерәме, контроль юҡмы, пилоттарға белем, тәжрибә етмәйме, юғиһә?

Дипломатия хеҙмәткәрҙәре көнөндә лә **(10)** әллә ни байрам кәйефе юҡ быйыл: яңыраҡ, АҠШ президенты посын ҡалдырып алдынан Обама 35 Рәсәй дипломатын иленән һөрөп ҡайтарҙы. Дипломатия тарихында булмаған хәл! Икенсе яҡтан, допинг ҡулланыуҙа ғәйепләнеп, спортсыларыбыҙ ситләтелә. Хәҙер уларға сит илгә сыҡмайынса, үҙебеҙҙә генә ярыш ойоштороорға тура килер, ахырыһы. Юҡ, допинг ҡулланыуҙа түгел, ә Ҡышҡы спорт төрҙәре **(12)** көнөндә, коньки һәм саңғыларҙа. **13 февраль** - Радио көнө беҙ уларҙың уңыштарын ишетеп тә ҡыуанырбыҙ әле. Бәә-ә-й, был ни хәл тыуып китте һуң әле беҙҙең менән? Бүренең мороно ашаһа ла, ашамаһа ла ҡан, тигәндәй, Рәсәй компьютерсыларына ла "һунар" башланды бит, бына ғибрәт! АҠШ президенты һайлауҙарға киберһөжүмдә ҡатнашлығы булыуҙа ғәйепләнеп, ҡатыны менән Испанияға ял итергә барған Рәсәй программасыһы ФБР тарафынан ҡулға алына. Компьютерсылар көнөнә **(14)** был да бер ҡалаҡ дегет булды, йәл...

Ә тормош бер нигә ҡарамай алға бара, шөкөр: кешеләр нисек тә йәшәргә тырыша, ғаилә ҡора, ғашиҡ була. Ә-ә-ә, Ғашиҡтар көнө **(14)** килеп еткән икән дә баһа! Ниңә донъялар яҡтырып китте, тиһәм... Ә шулай ҙа ғаилә ҡороу ғына етмәй, сәләмәт балалар тыуҙырып үҫтереү мөһим, юғиһә, сирле балалар бик күп. **15 февраль** Яман шеш менән яфаланыусы балалар көнө булараҡ, ете һаны теүәл, һау һәм аҡыллы балалар үҫтереүҙең үҙе бер бәхет булыуын иҫкә төшөрөп тора.

Календарҙа шундай бер ҡыҙыҡ көн дә билдәләнә, йәмәғәт: Бөтөн донъя социаль ғәҙеллек көнө **(20)**. Ысынлап ҡыҙыҡ, шулаймы? Мәңге тормошҡа ашмаҫ был хыял айырыуса беҙҙең Рәсәйҙә сағыу көүҙәләнеш алған. Байҙар менән фәҡирҙәр араһы бөгөнгө көндә бер-береһенән - ер менән күк араһы шикелле. Үәт һиңә - ғәҙеллек! Беҙҙең ни нәмәбеҙ генә бар инде? Әлдә шул телебеҙ бар, тип йыуанған булабыҙ ҙа шатланабыҙ. Уныһын да тартып алмаҫтар, тимә! "Киске Өфө"гә яҙылмай, оҙаҡ онотоп йөрөһәң, уныһы ла булыр, тәүбә. Әсә телендәге гәзит-журналға яҙылдыңмы; балаң, ейәнең башҡортса һөйләшә, уҡый-яҙа беләме? Бына шул һорауҙы тоҫҡай безгә Халыҡ-ара туған тел көнө **(21)**.

Сонтор ай, тиһәм дә, күҙәтеүе оҙонораҡ булды, биғәйбә. Һүҙҙе юғары нотала тамамлау өсөн әлдә матур байрамыбыҙ бар: **23 февраль** - Ватанды һаҡлаусылар көнө. Нимә-нимә - илебеҙҙе, телебеҙҙе һаҡларбыҙ. Башҡортостаныбыҙҙың Дәүләт флагын уның тыуған көнөндә **(25)** генә түгел, һәр саҡ юғары тотайыҡ. Ата-бабаларыбыҙ ҙа борон-борондан тап шулай эшләгән. Илеңдән яҙмаһаң - көнөңдән яҙмаҫһың, афарин илһөйәр ир-егеттәребеҙгә!

**Шулай итеп, февралдә тыуғандарҙы барлар мәл етте:**

**3** - Башҡорт халыҡ сәсәне, шағир-импровизатор **Ялан Йәркәйҙең** (Буранбай Ҡотдосов) тыуыуына - 250 йыл.

**5** - Революция хәрәкәте эшмәкәре, "Башҡортостан" гәзите мөхәррире **Бәхтегәрәй Шәфиевтың** тыуыуына - 120 йыл (1897-1918).

- Әҙәбиәт белгесе, тәнҡитсе, филология фәндәре кандидаты, яҙыусы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Ким Әхмәтйәновтың** тыуыуына - 85 йыл (1932-1980).

**8** - Дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1,2-се саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре **Венер Аҙнағоловҡа** - 70 йәш (1947).

**12** - Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Рәми Ғариповтың** тыуыуына - 85 йыл (1932-1977).

- География фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры **Айбулат Псәнчинға** - 50 йәш (1967).

**15** - прозаик һәм педагог **Лира Яҡшыбаеваға** - 70 йәш (1947).

**16** - шағир һәм драматург **Рафаэль Сафиндың** тыуыуына - 85 йыл (1932-2002).

**22** - Бөйөк Ватан һуғышында Ҡаршылыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыусы партизан отряды командиры, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Чехословакияның почетлы гражданы **Вафа Әхмәҙуллиндың** тыуыуына - 95 йыл (1922-1998).

**26** - РСФСР һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы, драматург **Илшат Йомағоловтың** тыуыуына - 85 йыл (1932-2007).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан етештереүселәре 11 февралдә Өфөнөң "Сипайлово" сауҙа-сервис комплексында үтәсәк гастрономия йәрминкәһенә әҙерләнә. Унда сыр яһаусылар һәм аҙыҡ-түлек етештереүсе предприятиелар ҡатнаша. Йәрминкә иртәнге сәғәт 11-ҙән киске 7-гә тиклем эшләй.

✓2017 йылдың 1 мартынан "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Юлдаш" мәғлүмәт һәм йыр-моң каналы сайтының русса версияһы эшләй башлай. Маҡсаты - аудиторияны арттырыу, каналдың танылғанлығын киңәйтеү. Көнүҙәк темаларға һәм яңы хәбәрҙәргә, шулай уҡ файҙаланыусылар өсөн ҡыҙыҡлы һәм файҙалы мәғлүмәттәргә баҫым яһаласаҡ. Сайт ҡунаҡтары конкурстарҙа, каналдың онлайн акцияларында ҡатнаша, чатта аралаша аласаҡ. Аудиояҙмалар һәм башҡа ашығыс булмаған мәғлүмәттәр урыҫ теленә тәржемә ителмәйәсәк.

✓Башҡортостан 250 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларҙа парктарҙы төҙөкләндереүгә федераль бюджеттан 18,7 миллион һумдан ашыу аҡса аласаҡ. Федераль бюджеттан өҫтәмә финансылауҙың сикке кимәле республика өсөн 83 процент тәшкил итәсәк. Парктарҙы тәртипкә килтереү буйынса эштәргә ҡала халҡы ла йәлеп ителәсәк.

✓Өфөлә йәштәр йәрминкәһенә килеүселәрҙең күбеһе эшкә саҡырыу алды. Йәрминкәлә 730-ҙан ашыу кеше ҡатнашҡан. Йәштәр йәрминкәһендә Өфө предприятиелары һәм ойошмалары сауҙа, транспорт, сәнәғәт, төҙөлөш, хеҙмәттәр өлкәһендә һәм башҡа тармаҡтарҙа 900-ҙән ашыу эш урыны тәҡдим иткән. Киләһе вакансиялар йәрминкәһе - "Коммуналь, социаль һәм шәхси хеҙмәттәр күрһәтеү, һаҡ эшмәкәрлеге" - 9 февралдә уҙа.

✓Баш ҡалала бензин йәнә ҡиммәтләнде. Был юлы - "Башнефть" йәмғиәтенең яғыулыҡ ҡойоу станцияларында. Хәҙер АИ-92 бензинының литры - 35,10 һум, АИ-92 Atum маркаһы 35,70 һум тәшкил итә. Декабрь аҙағына республикала "Лукойл-Уралнефтепродукт" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында ла бензинға хаҡтар артты.

✓Февралдә Башҡортостан халҡы дүрт көн дауамында - 23, 24, 25 һәм 26 февраль (кесе йоманан алып йәкшәмбегә тиклем) ял итәсәк. 2017 йылда бер нисә байрам ял көндәре менән тап килә. Шуның менән бәйле 1 һәм 7 ғинуарҙағы (йәкшәмбе һәм шәмбе) ял көндәрен 24 февралгә (йома) һәм 8 майға (дүшәмбе) күсерергә тәҡдим ителгән.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Стәрлетамаҡ - Ҡағы - Магнитогорск автотрассаһы төҙөлөшөнөң башланыуы ла Белорет районын урап үтмәйәсәк. Ул уңышлы тормошҡа ашырылһа, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат ҡалаларына тура юл асыласаҡ.*



*ҠЫҪҠАСА*

# БАЛАЛАР НИСӘ ҺУМҒА ТУҠЛАНА?

✓ Өфө хакимиәтендә мәктәптә тукланыуға хаҡтар раҫланды. Ҡайнар аштың хаҡы йәш төркөмдәре буйынса билдәләнә. Башланғыс класс уҡыусылары өсөн иртәнге аш 55 һум, төшкө аш - 65, төштән һуңғы аш - 22 һумдан да кәм булырға тейеш түгел. 5-11 класс уҡыусылары өсөн иртәнге аш - 60, төшкө аш - 70, төштән һуңғы аш 22 һум тәшкил итә. Документ льготалы категориялар өсөн бюджеттан дотацияларҙы күҙ уңында тота. Етемдәр һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар, социаль яҡтан хәүефле һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге балалар өсөн көнөнә 35 һум дотация ҡаралған. Дотация мөмкинлектәре сикле уҡыусылар өсөн көнөнә - 120-130 һум, күп балалы ғаиләләрҙәге балалар өсөн 10-15 һум тәшкил итә.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте мәғариф учреждениеларында белем алыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре араһында мәктәп туҡланыуының сифаты буйынса һорау алыу үткәргән. Унда 3942 бала һәм 3754 ата-әсә ҡатнашҡан. Яуаптарҙан күренеүенсә, дөйөм алғанда, гәмәлдәге система уҡыусыларҙы ла, уларҙың ата-әсәләрен дә ҡәнәғәтләндерә. Әммә яуаптарҙы анализлау һөҙөмтәһендә уҡыусыларға белгес тәҡдим иткән туҡланыу күрһәтмәһе иғтибарға алынмағанлығы асыҡланған.

✓ Хәҙер Өфөлә юлдарҙа барлыҡҡа килгән буш ҡатламы һәм колеянан таҙартыу маҡсатында өҫтәмә рәүештә грейдерҙар йәлеп ителә. Шулай уҡ тоҙ-ком ҡатнашмаһын күпләп ҡулланыу ҙа кәҙәллана, сөнки ҡаланың ҡатмарлы участкаларында шунһыҙ мөмкин түгел. Ҡом ҡаршың төҫөн үҙгәртеүгә ҡарамаҫтан, был осраҡта бындай алым иң һөҙөмтәле һәм экологик яҡтан зыянһыҙ.

✓ Башҡортостанда 11 айҙа халыҡ һаны 3 мең кешегә кәмегән. Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, улар - башҡа төбәктәрҙә йәшәүҙе хуп күреүселәр. Әммә мигранттар түгел, ә тап эшкә яраҡлы категория. Әлегә ыңғай демографияны тәбиғи тыуым тотоп тора. 2016 йылдың ғинуарынан ноябрҙә тиклем 51,4 мең бала тыуһа, 47,8 мең кеше вафат булған. Иң күп бала Баймаҡ һәм Бөрйән районларында тыуһа (мең кеше иҫәбенә 18,5 һәм 17 бала), иң түбән күрһәткес - Яңауыл районында (8,5).

✓ Башҡортостанда белем, квалификация, ғилми дәрәжә һәм исем хаҡындағы документтарҙың ысын булыуы тураһында мәғлүмәтте онлайн алырға мөмкин. Яңы мөмкинлек граждандарға ваҡыттарын экономияларға, республика Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү идаралығының үҙендә сиратта тормаҫҡа мөмкинлек бирә. Дәүләт хеҙмәтен күрһәтеү тураһындағы ғаризаны интернеттан ебәреп була. Мөрәжәғәт иткәндәргә уларҙың ғаризалары буйынса эштең һәр этабы хаҡында мәғлүмәт еткерелеп торасаҡ, тип билдәләйҙәр ведомстволa. Өҫтәмә мәғлүмәтте (347) 251-35-59 телефоны йәки obrnadzor55@bashkortostan.ru электрон почтаһы аша алырға мөмкин.

*ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ*

# БЕЛОРЕТТАР ӨМӨТЛӘНӘ



**"Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 яңы объект" республика акцияһы планына ярашлы, Белорет районында ла яңы объекттар файҙаланыуға тапшырыласаҡ.**

Әлеге ваҡытта Республика Хөкүмәтенә дүрт объект - Абҙаҡ һәм Инйәр ауылдарында балалар баҡсаһын, Йәйәктә мәҙәниәт йортон һәм күптәнге хыял - яңы ҡала Мәҙәниәт һарайын төҙөү буйынса ғариза бирелгән. Бөгөн Республика Хөкүмәтенең ҡушыуы буйынса, ҡала Мәҙәниәт һарайының проект хаҡын кәметеү мәсьәләһе хәл ителә. Әлеге ваҡытта ул 700 млн. һум тип билдәләнгән, төҙәтеү индергәндән һуң, сумма бер аҙ кәмер һәм Мәҙәниәт һарайының төҙөлөш планына инеү мөмкинлеге лә күпкә артыр, тигән ышаныс ҙур. Бынан тыш, Белорет халҡы быйыл үҙенең 255 йыллыҡ юбилейын байрам итәсәк. Был датаға ҡарата ла бик күп ыңғай һәм ҙур эштәр планлаштырылған. Байрамды ойоштороу планы әҙерләнгән дә инде. Планға ярашлы, юлдарҙы төҙөкләндереү эше дауам итәсәк. Районда юлдар проблемаһы өҫтөнлөклө мәсьәләләрҙең береһе тип иғлан ителгән һәм былтыр был йүнәлештә 100 млн һум аҡса тотонолған. Стәрлетамаҡ - Ҡағы - Магнитогорск автотрассаһы төҙөлөшөнөң башланыуы ла Белорет районын урап үтмәйәсәк. Ул уңышлы тормошҡа ашырылһа, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат ҡалаларына тура юл асыласаҡ. Шулай уҡ урамдарҙы төҙөкләндереү, фасад, ҡыйыҡтарҙы яңыртыу эше башланасаҡ, дегәнәк, кесерткән үҫкән һәр урын күҙ уңында буласаҡ. Ҡаланы төҙөкләндереү, бизәү өсөн бизнес әһелдәре менән эшлекле һөйләшеүҙәр, килешеүҙәр алып барыла. Әлеге ваҡытта ҡаланың Киров урамындағы һыу үткәргес файҙаланыуға тапшырыуға әҙерләнә. Ул Выселки-2, Мата арыяғы-2 урамдарында йәшәгән халыҡты сифатлы һыу менән тәьмин итәсәк. Ошо яңы биҫтәлә һәм Мәжит Ғафури урамында күп фатирлы йорттар төҙөү планлаштырылған. Былар ҡалала барған масштаблы төҙөлөштәрҙең береһе буласаҡ.

Тиҙҙән полиция бүлегенең яңы бинаһы файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Быға тиклем төрлө ерҙә таралып эшләгән полиция бүлектәре бер урында тупланасаҡ. Республика бюджеты иҫәбенә бинаны төҙөгән подрядсыларға бер дәғүә лә юҡ, барыһы ла сифатлы һәм ваҡытлы башҡарылған. "Металлург" стадионында ҙур реконструкция эштәре бара. Был йүнәлешкә 150 млн һум аҡса бүленгән, уның 30 млн һумы тотонолған да инде. Реконструкцияны 2018 йылда тамамларға тип планлаштырылған, эш тотҡарлыҡһыҙ барғанда 2017 йылда уҡ тамамлау мөмкинлеге бар.

Ыңғай үҙгәрештәрҙән, башҡарылған эштәрҙән сығып, шуны әйтергә була: Белореттар Республика Башлығы иғлан иткән "Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 яңы объект" акцияһын да уңышлы тормошҡа ашырыр һәм район халҡына лайыҡлы тормош булдырыу өсөн ҙур өлөш индерер, тигән ышаныс ҙур.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЙӘШ ҒАИЛӘЛӘРГӘ

**Быйыл Башҡортостан ауыл ерендә йәшәгән халыҡтың, шул иҫәптән йәш ғаиләләрҙең һәм белгестәрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса саралаҙы тормошҡа ашырыуға федераль ҡаҙнанан 244 502,4 мең һум аҡса аласаҡ.**

Аҡса "Рәсәй Федерацияһы граждандарын арзан, унайлы торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр менән тәьмин итеү" дәүләт программаһына ярашлы бүленә. Субсидиялар 2015-2020 йылдарға иҫәпләнгән "Торлаҡ" маҡсатлы федераль программаһының "Йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү" ярҙамсы программаһы нигеҙендә бирелә. Ярҙамсы программала торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж йәш ғаиләләргә торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн социаль түләүҙәр биреү ҡаралған. Торлаҡ хаҡының бер өлөшөн финанслау күләме балаһыҙ ғаиләләргә - 30%, балалылар өсөн 35% тәшкил итә.

# ХОСУСИЛАШТЫРЫП ӨЛГӨРҘӨҢМӨ?

**2017 йылдың 1 мартында дәүләт һәм муниципаль торлаҡ фонды биналарын граждандар милкенә бушлай тапшырыу программаһы тамамлана, - тип иҫкә төшөрҙөләр "Росреестр"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығында.**

Торлаҡты хосусилаштырып өлгөрөр өсөн күрһәтелгән датаға тиклем вәкәләтле органға ғариза бирергә кәрәк - Өфөлә ул Ер һәм милек мөнәсәбәттәре идаралығы, ҡала һәм районларҙа иһә муниципалитет хакимиәттәре. Программаның ғәмәлдә булыу ваҡыты тамамланһа ла, торлаҡты милеккә алыу килешеүе буйынса хоҡуҡтарҙы теркәү өсөн "Росреестр"ға мөрәжәғәт итергә мөмкин, - тип билдәләнеләр ведомствола. Бөгөнгә республикала 572693 торлаҡ фонды объекттары тураһында 1228050 граждандарҙың хоҡуғы теркәлгән дә инде. Ләкин торлаҡты хосусилаштырыу буйынса статистика йылдан-йыл кәмей. Әгәр 2013 йылда Башҡортостанда ай һайын биш меңгә яҡын хоҡуҡ теркәлһә, уҙған йылда - бөтәһе 2,5 мең самаһы. "Росреестр"ҙа барлыҡ граждандарға фатирҙарын тиҙерәк хосусилаштырырға тәҡдим итәләр. Шулай итмәгәндә, хосусилаштырылмаған торлаҡты һатып, алмаштырып йәки мираҫҡа ҡалдырып булмай.

# ТӨКӨТ ТӘ КИТ!

**РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығында ашығыс ярҙам машиналарына уларҙы үткәрмәгән автомобилдәрҙе төкөтөргә рөхсәт биреү өсөн ҡануниәткә үҙгәрештәр индереү мөмкинлеге тикшерелә.**

Ошо хаҡта, һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Татьяна Яковлеваға һылтанып, ТАСС агентлығы хәбәр итә. Ашығыс ярҙамға ҡаршылыҡ тыуҙырғандары өсөн яуаплылыҡҡа ҡатыландырыу тураһындағы фекер алышыуҙарға Петропавловск-Камчатский ҡалаһындағы хәл-вәҡиғә сәбәпсе булып тора. 10 ғинуарҙа кисен сит ил машинаһы водителе ашығыс ярҙам машинаһына юл бирмәй. Һөҙөмтәлә табиптарҙы көткән пациент, 21 йәшлек ир, вафат була."Ҡануниәтте ҡатыландырырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Әгәр ашығыс ярҙам машинаһын үткәрмәйҙәр икән, тимәк, был ихтыярһыҙ эшләнгән енәйәт кенә түгел. Был аңлы рәүештә үлтереү, тип әйтер инем. Нисек инде ашығыс ярҙамды, унан бигерәк, сигнал уттары янып торған реанимация машинаһын үткәрмәскә мөмкин", - тип фекерен белдерә һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостан театрҙарының ижади эшмәкәрлегенә ярҙам итеү өсөн 34,8 миллион һумдан ашыу аҡса аласаҡ. Тейешле ҡарарға Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған. Аҡса төбәктәрҙең 300 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларҙа муниципаль театрҙарҙың ижади эшмәкәрлегенә булышлыҡ итеүгә һәм матди-техник базаһын нығытыуға бәйле сығым йөкләмәләрен берлектә финанслау өсөн тәғәйенләнгән, тиелә белдереүҙә.

✓ Башҡорт дәүләт филармонияһында киләһе 79-сы миҙгелгә - 2017-2018 йылдарға абонементтар һатыла башланы. Билдәләнеүенсә, абонементтар - 25 процентҡаса ташлама ғына түгел, ә туғандарға һәм яҡындарға үҙенсәлекле бүләк тә. 1 февралдән ағымдағы һәм килһе миҙгел дауамында абонементтар көн һайын һатыла. Уларҙы һатыу йәрминкәһе 13 февралдә көндөҙгө сәғәт 4-тән башлана.

✓ Өфөнөң Киров районында социаль торлаҡ Кузнецов Затоны биҫтәһендә төҙөлә. Уҙған йылда 159 мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған - ул 2015 йылға ҡарағанда алты процентҡа күберәк. Дүртенсе кварталда авария фондынан күсеп килгәндәр өсөн күп ҡатлы йорт сафҡа индерелгән. 2017 йылда тағы дүрт "социаль" күп ҡатлы йорт төҙөләп бөтөргә тейеш, тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтендә.

✓ Өфөләге Муниципаль электр транспорты идаралығы етәксеһе Асҡар Фазлыев журналистарға ҡаланың көньяҡ һәм төньяҡ өлөшөн тоташтырыуҙың яңы планы хаҡында һөйләне. Билдәләнеүенсә, баш ҡаланың Рәсәй урамы буйлап трамвай юлдары һалыу ҡарала. Уның фекеренсә, Октябрь проспектындағы трамвай юлдарын бөтөрөү ҡала һәләкәте булды.

✓ Башҡортостанда Шәйехзада Бабичтың ижадына һәм республиканың ойошторолоуына 100 йыл тулыуға арналған конкурсҡа ижади эштәр ҡабул итеү башлана. Бәйгелә 2-11 класс уҡыусылары ҡатнаша ала. Номинациялар: шиғриәт, проза (хикәйә, инша, повесть, миниатюра), публицистика (мәҡәлә, очерк, фельетон). Конкурсҡа башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылған әҫәрҙәр ҡабул ителә. Эштәрҙе 1 мартҡа тиклем babis_muzeum@mail.ru адресына ебәрергә.

**✓ Республикала ла малайҙар күберәк тыуған, уларҙың һаны 27 меңдән ашыу, ҡыҙҙар саҡ ҡына әҙерәк - 25,5 мең самаһы. Сабыйҙарҙың уртаса буйы 52,07 сантиметр, уртаса ауырлығы 3,33 килограмм тәшкил итә.**



ЯҢЫ РУБРИКА: "ӨФӨ БАШҠОРТО"

**Өфө ябай ҡала түгел, ул - Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы, арҡа һөйәге. Беҙҙең йәшәйешебеҙ, яҙмышыбыҙ, тын алышыбыҙ унда ҡабул ителгән ҡарарҙарға, законларға, унда урынлашҡан идара ойошмаларына, унда эшләгән етәкселәргә, унда йәшәгән кешеләргә, унда һөйләнгән һүҙҙәргә, хатта ундағы мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт торошона ла бәйләнгән. Шуға ла, баш ҡала гәзите булараҡ, беҙ Өфөбеҙҙең һулышын, тормошон сағылдырырға, уның тураһында бар Башҡортостаныбыҙға һөйләргә тырышабыҙ ҙа инде. Шәхестәребеҙ менән дә даими таныштыра торабыҙ, яңы рубрикабыҙҙа күрһәтәсәк шәхестәрҙе бығаса тиклем дә яҙғаныбыҙ булғандыр. Хәҙер инде улар менән ошо рубрикалағы сығыштары аша яңыса, яңы күҙлектән, тик Өфө башҡорто булараҡ танышырһығыҙ. Шулай итеп, таныш булығыҙ: СССР-ҙың халыҡ артисы, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актрисаһы Гөлли МӨБӘРӘКОВА. Өфөнөң почетлы гражданы.**

# ӨФӨНӘН БАШҠА...

## бер ер ҙә кәрәкмәй миңә




**➔ Гөлли Арыҫлан ҡыҙы, Өфөнөң ҡайһы урамы һәм йорто һеҙҙең тыуған өйөгөҙ?**

- Мин СССР-ҙың халыҡ артисы, театр режиссеры, драматург Арыҫлан Мөбәрәков менән БАССР-ҙың халыҡ артисы, шағирә Рәғиҙә Янбулатова ғаиләһендә 1936 йылда Пушкин урамында урынлашҡан бала табыу йортонда донъяға килгәнмен. Ҡустым Салауат та шунда тыуҙы. Үҙем дә улымды ошо уҡ йортта таптым. Ногарев йорто тип йөрөтөлгән боронғо бина ул, хәҙер унда Урта махсус музыка колледжы урынлашҡан. Башҡорт опера һәм балет театры яғына ҡарап торған өлөшөндә балыҡ магазины була торғайны. Шунда уҡ мөйөштә бәлештәр һаттылар.

Мин тыуғанда атай менән әсәй театрҙың гримеркаһында йәшәгән. Атайым инде күренекле артист булып танылған шәхес булған был мәлдә. Һуңынан уларға Мостай Кәрим урамындағы Крәстиән йортонан бер бүлмә бирәләр. Мин үҫемдә иҫләй башлағанда беҙ ғаиләбеҙ менән Белгестәр йортонда - Ленин урамы, 2-се йортта йәшәй инек. Ошо йорт минең күңелемә яҡыныраҡ, тыуған йортом тип уны иҫәпләйем. Әйткәндәй, ул Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышына тиклем төҙәлгән иң ҙур торлаҡ йорт. Шағирҙар Ҡадир Даяндың, Рәшит Ниғмәтиҙең ғаиләләре менән аралашып йәшәнек. Республиканың беренсе кинооператоры Ғилван Әмиров беҙгә ҡаршы фатирҙа торҙо, беренсе ҡатта артист Ғималетдин Минһажевтар йәшәне. Башҡорт драма театры ул ваҡытта Башҡорт опера һәм балет театры бинаһында урынлашҡайны, шулай уҡ Рус драма театры ла ошонда ине, хатта подвалында Ҡурсаҡ театры эшләй торғайны. Ҡаланың ошо үҙәк өлөшөн генә белә инем. Уҡырға Горький исемендәге 3-сө урта мәктәпкә барҙым (хәҙерге 3-сө гимназия). Һуғыш мәле ине, был ваҡытта унда ҡыҙҙар ғына айырым уҡый инек.

**➔ Бөйөк Ватан һуғышы мәлендәге Өфө хәтерегеҙҙә ниндәй булып һаҡланған?**

- Гел генә ныҡ һалҡын, саҫҡау һыуыҡлы ҡыш күҙ алдымда. Өфөгә Ленинградтан, Украинанан эвакуацияланған кешеләр килде. Атайым да Мәскәүҙән күсеп килгән бер хәрбиҙең ғаиләһен алып ҡайтты, Неля тигән ҡыҙҙары бар ине. Немец самолеттары Уралға тиклем осоп килә, тигәндәрен, йорттарҙың тәҙрәләрен ҡаплап ҡуйыуҙарын хәтерләйем. Икмәк грамлап карточка менән генә таратыла. Театр колхоздарға гастролдәр менән сыҡҡанда, уларға аҙыҡ-түлек менән түләгәндәрҙер, тип уйлайым, сөнки атайым ҡайһы саҡта картуф алып ҡайта ине. Булған бөтөн ризыҡты өҫтәлгә ҡуйып, бергәләп ашайбыҙ.

(Дауамы 6-сы биттә).

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КҮБЕРӘК МАЛАЙҘАР ТЫУА

**Социаль страховка фонды мәғлүмәттәре буйынса, уҙған йылда 52 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ бала табыу сертификаты алған.**

Республикала ла, тотош Рәсәйҙәге кеүек үк, малайҙар күберәк тыуған, уларҙың һаны 27 меңдән ашыу, ҡыҙҙар саҡ ҡына әҙерәк - 25,5 мең самаһы. Сабыйҙарҙың уртаса буйы 52,07 сантиметр, уртаса ауырлығы 3,33 килограмм тәшкил итә. Әсәләрҙең уртаса йәше - 29. 2016 йылда "Бала табыу сертификаты" программаһы өсөн Социаль страховка фондының төбәк бүлексәһе 565 миллион һум аҡса тотонған. Уларҙың 151 миллион һумдан ашыуын йөклө осорҙа медицина хеҙмәтләндереүе өсөн ҡатын-ҡыҙҙар консультациялары алған. 320 миллион һумдан ашыуы - бала табыу йорттарына, 93 миллиондан күберәге бер йәшкәсә сабыйҙарҙы күҙәтеү хеҙмәттәре өсөн балалар поликлиникаларына йүнәлтелгән.

# БАЛАЛЫ ӘСӘЛӘРГӘ

**2017 йылда әсәлек капиталы күләме былтырғы кимәлдә ҡала һәм 453 026 һум тәшкил итә.**

2018 йылдың 31 декабренә тиклем ғаиләлә икенсе йәки артабанғы сабыйҙың тыуыуы әсәлек капиталына хоҡуҡ бирә. Әммә сертификатты алыу һәм аҡсаны тотоноу ваҡыты сикләнмәгән. Аҡсаны торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, баланы уҡытыуға, әсәнең буласаҡ пенсияһына, шулай уҡ инвалид балаларҙы социаль яраҡлаштырыуға йүнәлтергә мөмкин. "2007 йылдан республикала 260 мең дәүләт сертификаты тапшырылған. Ошо ваҡыт эсендә балалары булған ғаиләләргә ярҙам күрһәтеүгә киткән сығымдар 72 миллиард һум тәшкил иткән", - тип хәбәр итте Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идараһы Фоат Хантимеров. Уның әйтеүенсә, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға - 67,5 миллиард, белем биреү хеҙмәттәрен күрһәтеүгә, пенсияның тупланма өлөшөн булдырыуға, инвалид балаларҙы йәмғиәттә социаль яраҡлаштырыуға - 371,6 миллион, бер тапҡыр бирелә торған түләүгә 4 миллиард һум йүнәлтелгән.

# ПЕНСИЯ АРТА

**2017 йылдың 1 февраленән страховкалау пенсияһының уртаса билдәләнгән түләү күләме, 294 һумға артып, 5724 һум тәшкил итәсәк.**

Ҡартлыҡ, I һәм II төркөм инвалидлыҡ буйынса страховкалау пенсияһына билдәләнгән түләү күләме - 246 һумға артып, 4559 һум, ҡараусыһыҙ ҡалыу һәм III төркөм инвалидлыҡ буйынса страховкалау пенсияһы, 123 һумға артып, 2402 һум тәшкил итәсәк. Страховкалау пенсияһына билдәләнгән түләүҙәр күләмен күтәреү бөтә эшләмәгән страховкалау пенсияһын алғандарға ҡағыла. Был 30 миллион самаһы кеше, тип хәбәр ителә Рәсәй Хөкүмәте сайтында. Һәҙәмтәлә ата-әсәһеҙ ҡалған, янғыҙ әсәһе үлгән балалар, 80 йәшкә еткән пенсионерҙар, I төркөм инвалидтар, тәрбиәһендә кеше булған пенсионерҙар, шулай уҡ башҡа граждандар өсөн страховкалау пенсияһына билдәләнгән түләүҙәр күләме арттырыласаҡ.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Етен

❖ Етен орлоғо бик шифалы, 4 аҙна буйына ризыҡтарға етен орлоғо ҡушып ашау ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә, эсәктәр эшмәкәрлеген яйға һала. Бының өсөн 1 стакан ҡайнар һөт йәки һыуға 1-2 стакан тарттырылған етен орлоғо һалырға, 1-2 минут торорға һәм тоҙ, шәкәр йәки бал ҡушып ашарға. Шулай уҡ етен онон һоло, дөгө, ҡабаҡ бутҡаһына өҫтәп ашарға була.

❖ Етен коктейле. 200 мл ананас һутына 1 ҡалаҡ етен оно, 1 балғалаҡ етен майы һалып, 5-10 минуттан яҡшылап болғатырға.

❖ Ашҡаҙан өсөн шифалы бутҡа. 2 балғалаҡ етен онона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10-15 минуттан ашарға.

❖ 2 ҡалаҡ етен онон 1 стакан ҡатыҡҡа ҡушып эсергә.

## Йод менән сода

❖ Өйҙә йод менән аш содаһы булһа, ҡайһы бер осраҡтарҙа антибиотиктар ҙа кәрәкмәй. Тонзиллит, эренле ангина ваҡытында йотҡолоҡ миндалинаһын аш содаһы менән дауалайҙар. Еүеш бармаҡты содаға манаһың һәм миндалинаға һөртәһең. 2 сәғәт ашамаҫҡа һәм эсмәҫкә.

❖ Танау ҡыуышлығы әсетеп торһа, йүткергәндә соданы һыуҙа иҙеп, танауға һөртөргә һәм тәрән итеп танау аша тын алырға. Был ауырыуға артабан аҙып китергә ирек бирмәйәсәк.

❖ 2 ҡалаҡ һыуға 6-7 тамсы йод тәнәтмәһе йәки бер семтем сода һалырға, танау ҡыуышлығын сайырға. Йодты асып, тәүҙә уң, һуңынан һул танау ҡыуышлығы менән йод быуын һуларға.

❖ Ныҡ йүткергәндә төнгөлөккә күкрәк ҡыуышлығын йод менән ышҡырға. Был плеврит мәлендә лә файҙалы.

❖ Берәй яра алғанда, уны йод менән эшкәртегеҙ һәм шунан ғына лейкопластырь йәбештерегеҙ.

❖ Төнгә шырау ингәндә уны энә менән соҡоп аҙапланмағыҙ, был урынды йод менән эшкәртегеҙ. Ул шырауҙы "яндырасаҡ".

❖ Тырнаҡ бәшмәге булғанда аяҡ йәки ҡулдарҙы эҫе һыуға тығып ултырырға, тырнаҡтың өҫкө ҡатламын алып ташларға, йод һөртөргә һәм лак менән ҡапларға. Дауаны көн дә ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Башҡорт - ул Салауат һымаҡ, тигән ҡараш формалаша. Тамара Нечаева С. Юлаевтың бюсын эшләгәс, ҡабул итергә килгән комиссия "Был ниндәй Салауат булһын, был бит Мөбәрәков", тип тә әйткән.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Кейемдәрҙе биҙәү өсөн ҡулланылған элементтар араһында Урта Азия һәм Көньяҡ Себерҙә көн күргән, күсмә тормош алып барған халыктарҙыкына оҡшаштары бар.**

Мәҫәлән, эләндең арҡаһында яһалма кеҫәләр Көнбайыш Себер халыҡтары өсөн дә хас. Уларҙа ирҙәр кейеменең арҡаһында геометрик һүрәтле горизонталь итеп теләгән таҫмалар бар. Билдән өҫтәрәк һалынған был биҙәк башҡорттарҙа "бөйөрләк" ("бөйөр" һүҙенән) тип атала.

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары эләненең тағы бер үҙенсәлеге булып яурынсалар тора **(һүрәт)**. Яурынсалар - ҡатын-ҡыҙ-амазонкаларҙың яугир үткәне тураһында белдереп тора. Бындай яурынсалы эләндәр таралған райондар борон амазонкалар йәшәгән ерҙәр менән тура килә. Билдәле булыуынса, савромат ҡатын-ҡыҙҙары һыбай яҡшы йөрөй, ир-егеттәр менән бер рәттән яуҙарҙа ҡатнаша. Тәүҙә был яурынсалар кәүҙәне һаҡлаусы ролендә ҡулланыла, шулай уҡ кейемде ауыр тимер яу ҡоралдарынан ышҡылыуҙан һаҡлай. Һуңғараҡ яурынсалар костюмды биҙәү өсөн ҡулланыла башлай.



Көньяҡ-көнсығыш эләнен биҙәү композицияһы өс ҡатлы донъя системаһын күрһәтеп тора. Башҡорттарҙың өс кейемендә, мәҫәлән, Урал тауы һырты һүрәтен күрергә була **(һүрәт)**. Һүрәт башлыса урта донъяға тура килә, бында тәбиғәттең матурлығы һүрәтләнә. Иң ҡыҙығы, бындай биҙәлеш Көньяҡ Уралда йәшәүселәрҙең өҫкө кейемендә генә осрай. Мәҫәлән, төньяҡ башҡорттары кейемендә быға оҡшаш биҙәк юҡ. Тимәк, кейемдең биҙәгенә ҡарап, кешенең ҡайһы төбәктә көн күреүен билдәләү ауыр булмаған.



Эләндең арҡа өлөшөнә иғтибар итәйек - унда тормош ағасы һүрәтләнгән **(һүрәт)**. Тормош ағасының тамырҙары - ул атабабаларыбыҙ, олоно - атай-әсәйҙәребеҙ, ботаҡтар - балалар һәм был тере организм тулы ҡеүәтендә йәшәһен өсөн ошо өс өлөш тә булырға тейеш. Быуындар бәйләнеше тураһында һүҙ алып барғанда "тамыр" һүҙе бөгөн дә әүҙем ҡулланыла. Шуға ла өлкәндәрҙе ихтирам итһендәр, тамырҙарын онотмаһындар тип, йәштәрҙең туй кейеменә ошо биҙәкте һалғандар. Биҙәктең тағы бер мәғәнәһе - сәләмәт балалар теләү, шул саҡта ғына ырыу нығ һәм ҡеүәтле була.



**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЯҢЫ РУБРИКА: "ӨФӨ БАШҠОРТО"

# ӨФӨНӘН БАШҠА...

## бер ер ҙә кәрәкмәй миңә

**(Башы 5-се биттә).**

Айырым бригадалар төҙөп, театр фронтҡа ла бара ине. Рәшит Ниғмәтиҙең "Үлтер, улым, фашисты" поэмаһы телдән-телгә күсеп һөйләнелә ине был мәлдә. Шулай 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына концерт ҡуйырға барғанда атайым менән Рәшит Ниғмәти һуғышта ҡалырға хәл итәләр. "Һеҙ милли сәнғәтте һаҡларға бурыслыһығыҙ", - тип, уларҙы кире ҡайтаралар. Шул хәтеремдә ҡалған, өйөбөҙгә артистар, күршекүлән йыйылған, тонок ҡына ут яна, ауыр тынлыҡ урынлашҡан. Атайым иҙәнгә ултырып, стенаға һөйәлеп алған да, фронт хәлдәрен һөйләй. "Ялан госпиталендә булдыҡ, тотош кәүҙәһе янған йәш кенә танкисты алып китеп барғанда, күҙҙәребеҙ осрашты. Уларҙа шундай һыҙланыу сағыла ине", - тип һөйләй, үҙе тештәрен шығырлата. Беҙ, балалар ҙа, фронтҡа кисет сигә, әсәйҙәр бейәләй бәйләй ине. Шул мәлдә халыҡтың берҙәмлеген белһәгеҙ! Бөтән нәмә фронтҡа, беҙ бында нисек тә сыҙарбыҙ, тип йәшәнек. Беҙ йәшәгән йортто немец әсирҙәре төҙөп бөткән икән. Төҙөләштә йөрөгән немецтарҙы мин ябай кеше кеүек итеп ҡабул итә инем. Тик бер көндө эвакуацияланып килгән бер әбей уларға нәфрәтен белдереп, ер кисәге алып бәрҙе, шунан ғына мин уларҙың дошман тип аталыуҙарын аңланым.

Ауыр ваҡытта ла театр эшләне. Көн һайын сәхнәгә сығыу үҙенә күрә героизм булған бит. Бина тейешенсә йылытылмай, етмәһә, туйғансы ашамауҙан балериналарҙың һуштан яҙып ҡолаған мәлдәре лә була ине. Ә спектаклдән һуң театрҙың йылытыу системаһы урынлашҡан ерҙә актрисалар бысраҡ марля, һалдаттарҙың кальсондарын, кизе-мамыҡ салбарҙарын, ҡанлы шинелдәрен йыуа. Һабынлы һыуҙа ҡан күперә, ул һыуҙы иҙәндәге тишектән ағыҙып ебәреүҙәре әле лә күҙ алдымда. Есе шулай уҡ онотолоҡ түгел.

**➔ Башҡорт театры - Мөбәрәковтар ғаиләһе өсөн икенсе йорт, бәлки, хатта унан да ҡәҙерлерәк урын булғандыр, моғайын?**

- Атайым менән әсәйемде театрға һөйөү осраштырған. Совет заманына ҡараш төрлө бөгөн, әммә уның ыңғай яҡтары ла күп. Мәҫәлән, йәштәргә белем алырға, һәләттәрен үҫтерергә мөмкинлектәр тыуҙырылған. Әсәйем дә Эшсе йәштәр театрында шөғөлләнгән, ә театр артистары улар менән шефлыҡ иткән, спектаклдәргә күмәк сәхнәләргә сығырған. Әсәйемде ҡараҡай тип йөрөткәндәр. Бик нескә, лирик актриса ине ул, матур йырлай торғайны. Ауыр йылдар, бөгөнгө кеүек алтын-көмөш йөҙөктәр юҡ. Әсәйемдең йөшел бығла ҡашлы ябай ғына йөҙөгө булған. Шуны сәхнәлә уйнап йөрөгәндә атайым һурып алып, үҙенең сәнсә бармағына кейеп ала һәм партнерына монолог һөйләгәндә бармағын әсәйемә күрһәтеп ала, йәнәһе, һүҙҙәрем бына кемгә тәғәйенләнгән! Эй оялыуым шунда, ти ине әсәйем. Ошо йөҙөккә бағышланған шиғыры ла бар уның. Бына ошолай бик матур башланып китә уларҙың мөхәббәте.

Әсәйемде өйҙә гәҙәти кейемдә, ашһыу әҙерләп йөрөгән килеш күреп, уның сәхнәләге геройҙарынан шундай айырыла алыуына аптырай торғайным. Ул мине гел матур йөрөтөргә тырыша ине. Ә атай өйҙә атай булараҡ та, сәхнәлә актер булараҡ та бер кеүек ине. Кире ролдәре лә булманы бит уның, тик иң аҫыл ир-егеттәр ролдәрен башҡарҙы. Көр тауышлы, төҫкә сибәр, кәүҙәһе лә мөһәбәт. Өйҙә икәүләп репетициялар яһай инеләр. Хәтеремдә, Салауат ҡустым менән мине аҡ тула шәлгә төрөп ултыртҡандар, сөнки булмә йылытылмай. Беҙҙең аяҡтарыбыҙ иҙәнгә теймәй, тимәк, бәләкәй булғанбыҙ. Шекспирҙың "Отелло"һы булғанмылыр, монологтарҙан һуң атайымдың геройы ҡырҡа ғына итеп: "Юҡ!" - ти. Әсәйемдең геройняһы илап тороп тағы үтенә. Шуны ҡустым менән илап ҡарап ултырабыҙ. Бына кисә генә булған кеүек ошо ваҡиғалар.

Ысынлап та, иртән дә, кисен дә беҙ театрҙа инек, атай менән әсәйгә эйәреп килеп, шунда аяҡ аҫтында буталып йөрөйбөҙ. Хөсәйен Ҡудашевтың улы менән ҡыҙы, Вәли Ғәлимовтың, Һәҙиә Бәширова тигән актрисаның балалары менән уйнағаныбыҙҙы хәтерләйем. Ошо балалар араһынан мин генә актерлыҡ юлын һайланым. Әммә бәләкәйҙән артист булам тип хыялланманым. Музыка менән шөғөлләнеп йөрөгән мәлдәр булды, бер ваҡыт хатта табип булғым килгәйне. Мәктәрәмдә Мәскәүҙән ГИТИС-тан комиссия килде лә, мин дә имтихан биреп ҡарарға хәл иттем. Атайым: "Аяғыңды баҫаһы булма", - тип, риза булманы. Әсәйемдең, һынап ҡара үҙеңде, тигән һүҙҙәре этәргес булды. Шулай итеп, тормошом сәнғәт яғына боролдо ла ҡуйҙы. Ҡустым телевидение режиссеры булып китте.

**➔ Өйҙәге аралашыуҙар ҙа башҡорт телендә булғандыр?**

- Мин уҡырға барғанда русса бөтөнләй белмәй инем. Белмәгәс, бер нәмә лә аңламайым, шуға ла насар уҡыйым, сөнки мәктәптә уҡыу русса бит инде. Мин генә түгел, ул осорҙа башҡорт балалары бөтәһе лә ошо хәл аша үткәндәр. Мин Ҡадир Даяндың ҡыҙы Луиза менән бергә уҡыным, ул сосораҡ була торғайны. Вера Федоровна Евлапьева тигән өлкән йәштәге бик шәп уҡытыусы хәтеремдә ҡалған, боронғоса тәрбиә алған кеше ине ул. Ҡара сарафан, аҡ кофта кейә ине, иҫке, әммә яҡшылап крахмалланған жабо таға ине. Өйҙә минең менән шөғөлләнеп ултырырға кеше юҡ, Вера Федоровна уҡырға, грамматикаға өйрәтте. Ҡайтам да, ҡысҡырып русса китаптар уҡыйым. Шуны һаман иҫләйем: Толстойҙың "Война и мир" романында миңә таныш булмаған һүҙҙәр бар, бигерәк тә "высший свет" тигәнен аңлай алмайым. Свет - ут икәнен беләм, ә бына высший свет башыма һыймай. Яҙырға ҡағыҙ юҡ, гәзиттән, һуңғараҡ әйбер урай торған ҡағыҙҙан дәфтәр тегеп бирә әсәй. Ут та юҡ, коптилка яҡтыһында әсәй кейемдәр тегә ине.

Һуңғараҡ, Өфөлә башҡортса һөйләшеү оят, тип һаналған аяныслы осорҙар ҙа булды. Үҙ телеңдә һөйләшһәң, кәмһетеп ҡарайҙар ине. Шөкөр, ул ваҡыттар ҙа үтте. Бөгөн урамда йәштәр рәхәтләнеп башҡортса һөйләшә, үҙенсәлекле башҡорт мөхите бар баш ҡалабыҙҙа.

**➔ Өфөләге иң яратҡан урынығыҙ ҡайҙа?**

- Минең улай ҡалаға сығып, парктарға барып ял итә торған ғәҙәтем юҡ. Булған хәлдә лә, ваҡыт таба алмаҫ инем. Өфөнөң һәр бер урыны матур, машинала китеп барғанда ғына ла күренеп ҡала. "Ете ҡыҙ" фонтаны ҡалай үҙенсәлекле төҫ бирҙе ҡалабыҙға. Атайыма ҡуйылған һәйкәл дә оҡшай миңә. Урыны ла бик матур уның. Уны Владимир Дворник бик яратып эшләне, тип иҫәпләйем. Үҙенсәлекле һәйкәл, уның бөйөк артистыҡы икәне күренеп тора, шундай мөһәбәт, күҙҙәрендә бушлыҡ түгел, фекер уты сағыла. Ир заты башланғысы ла бар, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер образ ғына түгел, ошо ерҙә атлап йөрөгән, ошо ер кешеһе икәне лә күренә. Сәнғәттең көсө ошонда инде.

Атайымдың тыуған ере Белорет районы Асылағы бюсы эргәһенән дә кеше өҙөлмәй. Үҙе хәҙер 40 йыллап юҡ, ә иҙады йәшәй. Халыҡ балаларын алып килә унда, уның тураһында һөйләп торғандарына үҙем бер нисә ҡат шаһит булдым. Протазановтың фильмында Салауат Юлаевты уйнағас, ул бит халыҡ символына әүерелә. Башҡорт - ул Салауат һымаҡ, тигән ҡараш формалаша. Тамара Нечаева С. Юлаевтың бюсын эшләгәс, ҡабул итергә килгән комиссия "Был ниндәй Салауат булһын, был бит Мөбәрәков", тип тә әйткән. Нечаева атайымда башҡорт ир-егетенең бөтән сифатын күргән, шуны раҫлай ҙа алған. Һуңғараҡ ул атайымдың бюсын эшләне. Был эшкә шул тиклем яуаплы ҡараны, хатта шул мәлдә операцияға ятырға мәжбүр булғанда ла уҡыусыларына, минең Мөбәрәковыма теймәгеҙ, тигәйне. Асыға үҙе барып, урын һайланы. Әсәйем дә иҫән ине әле ул ваҡытта. Музей, бюст булғас, Асыға күпер төҙөүҙе лә, асфальт һалыуҙы ла тиҙләттеләр.

Ғөмүмән, Өфөнөң аллеяларының йылдан-йыл күркәмләнә барыуы ҡыуандыра. Шуларға өҫтәп, архитектурала башҡорт милли һыҙаттары сағылһын ине, тип теләйем. Башҡортостандың баш ҡалаһы икәне күренеп торһон ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Осрашыуыбыҙ һуңында Гөлли Арыҫлан ҡыҙы: "Мин Өфөнөң патриоты инде ул. Өфөнән башҡа бер ер ҙә кәрәкмәй миңә. Бала сағымдағы Өфөнө лә, бөгөнгөһөн дә яратам. Балаларым, тамашасыларым, уҡыусыларым бар, мин бында үҙемде кәрәкле итеп тоям", - тигәйне. Бына шунда бит бәхет асылы: тыуған йортоң, тыуған ауылың, тыуған ҡалаң, тыуған республикаң булыу һәм һин үҙеңде ошонда кәрәкле итеп тойоу.**

*Ләйсән НАФИҠОВА*
**әңгәмәләште.**

*✓ Башҡорттар тормошоноң традицион шарттары үҙгәреүен Ә. Вәлиди кире баһалай. Цивилизацияның башҡорттарға, уларҙың рухи мәҙәниәтенә кире йоғонто яһауы хаҡында һүҙ йөрөтә.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ОЛУҒ ҒАЛИМЫБЫҘ ӘЙТКӘН ҺҮҘ,

## йәки Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге



**"Тарихсыларҙың тарихты дөрөҫ итеп яҙыу кеүек ауыр эше бар. Ышаныслы тарих йәки хәҡиҡәт бик күп тарихи мәғлүмәттәрҙе үтә нескә иләк менән иләгәндән һуң ҡалғандарҙан ғына хасил була ала", тигән Әхмәтзәки Вәлиди. Тарихты һәм тарихсының ролен юғары баһалаған һүҙҙәренә раҫ итеп, ғалимдың башҡорттарҙың тарихы һәм этнографияһы буйынса хеҙмәттәренән өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**

Ә. Вәлидиҙең башҡорт халҡының этнографияһы һәм тарихына ҡағылышлы хеҙмәттәре араһынан "Бөрйән башҡорттары араһында" тигәнен айырыуса билдәләп үтергә кәрәк. Был хеҙмәт 1913 йылда йәйге каникулда, бөрйән башҡорттары йәшәгән райондарға яһаған ҙур булмаған сәйәхәтенән һуң яҙыла һәм шул уҡ йылда "Шура" журналының 19-20-се һандарында донъя күрә.

Мәҡәләлә хикәйәләү автор исеменән алып барыла. Беренсе биттән үк беҙ унын янғыҙы ғына түгел, ә студент дуҫы менән бергә сәйәхәт ҡылыуын төҫмөрләйбеҙ. Сөнки ул мәҡәләнең аҙағынаса "беҙ" алмашын ҡуллана, әммә дуҫының исемен атамай. Ул Башҡортостанға Вәлиди менән бергә ял итергә һәм ҡымыҙ эсергә килеүсе татар яҙыусыһы Фуат Туҡтаров булып сыға. Был хаҡта Ә. Вәлидиҙең "Хәтирәләр"ендә телгә алына.

Был хеҙмәтендә Ә. Вәлиди тарихи процесты өс осорға бүлә: ҡырағайлыҡ, вәхшилек һәм цивилизация. Үҙе йәшәгән осорҙағы башҡорттарҙы ул өсөнсө баҫҡысҡа - цивилизациялы осорға индерә. Башҡорт халҡының төрлө төркөмдәренең ижтимағи, иҡтисади һәм мәҙәни үҫешендәге айырмаларын билдәләй. Бөрйән ырыуы - иң төп башҡорт ырыуы, тип иҫәпләгән Небольсиндың фекеренә ҡушылып, былай ти: "Хәҡиҡәтән, башҡорттар менән яҡын танышлыҡ күрһәтә ки, бөрйәндәр кәрәк мәғишәт, тел вә ғәир хосустарҙа башҡорттарҙың иң саф булғандарын тәшкил итәләр". Ошо фекерҙе артабан да үҫтереп һәм үҙенең тәжрибәһенә таянып, "беҙ булған был ауылдар мәғишәт тарафынан ҡыҫылып, икенсенән, күрше башҡорт үә татарҙар йоғонтоһона бирелә төшөп, бер аҙ үҙгәргәндәр", - тип яҙа.

Вәлиди фекеренсә, "бөрйәндәр - башҡорттарҙың саф булғандары - үҙенсәлектәрен тамам юғалтып баралар". Рустар һәм татарҙар менән аралашыу башҡорттарҙы бөтөнләй үҙгәртте тип иҫәпләй ул: "Тел, ғоруф вә ғәҙәттәрендә юғары ике күрше ҡәүемдәренең йоғонтоһо күренеп тора. Бынан зыян да юҡ кеүек, әммә уларҙың эске һәм тышҡы мәҙәниәттәренә (әхлаҡ вә мәғишәттәренә) йоғонтолары быларҙы был көн тамам аяныс хәлгә килтереүе мөмкин". Башҡорттар тормошоноң традицион шарттары үҙгәреүен Ә. Вәлиди кире баһалай. Цивилизацияның башҡорттарға, уларҙың рухи мәҙәниәтенә кире йоғонто яһауы хаҡында һүҙ йөрөтә. Ул боронғоно идеаллаштыра һәм цивилизация йоғонтоһона эләкмәгән бөрйәндәр әхлаҡи яҡтан тарҡалмаған, тип иҫәпләй.

Башҡорттар хаҡында төрлө мәғлүмәттәрҙе ҡулланып яҙылған этнографик характерҙағы был мәҡәләһендә автор башҡорт халҡының тарихына историографик күҙәтеү яһай. Никольский тарафынан төҙөлгән һәм 1899 йылда "Этнографическое обозрение" журналында донъя күргән башҡорттар тарихы буйынса хеҙмәттәрҙең каталогын айырым билдәләп үтә һәм "башҡорттар тураһындағы әҙәбиәтте өйрәнеүҙе" еңеллләштерҙе, ти.

Ә. Вәлиди башҡорттар тарихының насар өйрәнелеүенә зарлана һәм былай ти: "Беҙҙең ғоләмә һәм ғилми йәмғиәттәр Себерҙең әллә ҡай соҡорҙарындағы, бөтөн халҡы ике мендән ғибәрәт булған ваҡ таифәләрҙе өйрәнеү юлында байтаҡ ҡына аҡса сарыф итәләр. Әммә күҙ төбөндәге башҡорттарҙы өйрәнеү хосусында эшләмәйҙәр". Башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусы профессор Н.К. Дмитриев та башҡорт теленең революцияға тиклем Рәсәйҙә аҙ өйрәнелеүен билдәләй. Былай тип яҙа ул: "Революцияға тиклем башҡорт теле элекке Рәсәйҙә иң аҙ өйрәнелгән телдәрҙең береһе булған, хатта үҙе ингән төрки телдәр төркөмө эсендә лә. Әҙербайжан, сыуаш, ҡаҙаҡ, татар телдәре генә түгел, хатта үҙәктән алыҫта булған яҡут йәки урәнхәй (тува) телдәре лә күп мәртәбәгә яҡшыраҡ өйрәнелгән булған. Күренекле тюркологтар: академик В.В. Казембек, И.Н. Березин һәм башҡаларҙың хеҙмәттәрендә башҡорт теле телгә алынмаған тиергә була, алынған хәлдә лә, авторҙар йыш ҡына уны тулыһынса яңылыш күҙ алдына килтерә". Был һүҙҙәр Ә. Вәлидиҙең фекере менән ауаздаш.

Әхмәтзәки Вәлиди Рәсәй ғалимдарын "беҙҙең ғалимдар" тип атаһа ла, сығыштары буйынса төрки булған ғалимдарҙы уларҙан айыра. Был осраҡта ул һуңғыларын "беҙҙеке" тип йөртә. Башҡорттар хаҡында тикшеренеүҙәрҙә былай тип яҙа ул: "Беҙҙең үҙебеҙҙә инде бер нәмә лә юҡ тиһәк тә ярай. Тик һуңғы көндәрҙә бер-ике мәҡәлә илә бер китап сығып ҡалды". Шул китаптар һәм мәҡәләләр араһынан ул Һаҙый Атласиҙың "Башҡорт тарихы" исемле китабын, Ғ. Ғүмәриҙең "Башҡорттар бөтәрме?" тигән әҫәрен, М.Өмөтбаевтың "Йәдкәр"ен атап китә.

Һ. Атласиҙың китабын тикшергәндә, Әхмәтзәки Вәлиди Игнатьев һәм Гурвичтың "Справочная книга Уфимской губернии" тигән китабын тәржемә итеп, тик ҡайһы бер мәғлүмәттәр генә кереткеләүе өсөн уны бик ныҡ тәнҡитләй. Артабан ул башҡорт тарихын өйрәнеүгә талаптар ҡуя: "Әммә "Башҡорт тарихы" булһа, унда ул ҡәүемдең Русия ҡулына кереүҙән элгәре хәлдәре, мәғлүм булған ҡәҙәре хандары вә Русия ҡул аҫтына кергәндәре һуңынан хөкүмәттең, мәҫәлән, уларҙың ерҙәргә вә идара хосустарына ҡарап төҙөгән тәдбирҙәре үә ул тәдбирҙәрҙең вә мәғишәтенең ошо һуңғы заманғы башҡортто нисек килтереп сығарыуы һөйләнергә тейеш ине". Был талап Вәлидиҙең башҡорт тарихын системалы өйрәнеү теләген сағылдыра. Унын башҡорт шәжәрәләрен ғәрәп һәм Европа сығанаҡтары менән сағыштырып, башҡорт тарихын өйрәнеүҙе ниәт итеп ҡуйыуы ла ошо фекерҙән сығып эшләнә һәм ул "уларҙың асылдары, этник составы хаҡында шул ваҡытта ғына бер ҡарарға килергә кәрәк", тигән һығымта яһай.

Башҡорттарҙың килеп сығышына килгәндә, Әхмәтзәки Вәлиди, улар финдар йоғонтоһо булған төрки ырыуҙарҙан барлыҡҡа килгән, тип фаразлай. Унын был фекере хәҙерге башҡорт тарихсыларының тикшеренеүҙәре менән тап килә.

М. Рәмзиҙең "Тәлфиҡ әләхбәр" тигән китабына таянып, ул "бөрйән халҡы ла бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең тыуыуынан элгәре үк тарих битенә инеп ҡалған һәм был көнгә ҡәҙәре онотолмай килгән бер ҡәүем" тип ғорурлыҡ менән яҙа.

Ә.Вәлиди үҙенең хеҙмәтендә башҡорт халыҡ йырҙары тураһында былай ти: "Улар моңлораҡ, уларҙа ниндәйҙер үҙенсәлекле киңлек, үҙенә генә хас гүзәллек бар, ниндәйҙер билдәһеҙлеккә, уйсанлыҡҡа ынтылыш һиҙелә. Ғөмүмән, башҡорт йырҙары эстәлегендә тормош фәлсәфәһе элементтары, тормошҡа фәлсәфәүи ҡарауға йүнәлеш күренә", - тип яҙа. Ул башҡорт көйөнөң милли үҙенсәлеген дә билдәләп үтә: "Башҡорт көйҙәрендә көнсығыш стилендәге биҙәүҙәр аҙыраҡ: уларҙың ритмы тигеҙлек менән айырыла".

Ә. Вәлиди Рыбаковтың тикшеренеүҙәре менән таныш булған һәм башҡорт музыкаһын тасуирлағанда йыш ҡына унын фекеренә һылтанған. Әммә шул уҡ ваҡытта Рыбаковтың төркиҙәр тарихын насар белеүен һәм башҡорт көйҙәрен европаса ҡабул итеүен һыҙыҡ өҫтөнә алып үтә. Рыбаковтың "Европа кешеһенең ҡолағы башҡорт көйҙәренә тиҙ эйәләшә алмай" тигәне менән Вәлиди килешмәй. Ул Рыбаковтың һүҙҙәрен төрки халҡының милли байлығына бер ниндәй тарихи ерлекһеҙ хасланыу тип иҫәпләгән.

Музыка хаҡында бәйән иткәндә, Ә. Вәлиди милли мәсьәләгә лә ҡағылып үтә. Ул үҙҙәрен "мәҙәни" тип һанаған һәм башҡалар өсөн ҡарарҙар ҡабул иткән кешеләрҙе ғәйепләп яҙған. Унынса, төрки халыҡтарының милли музыкаһы тергеҙелеүе уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи йоғонтоһонан һаҡлай алыр ине. "Беҙ үҙебеҙҙең милли музыкабыҙҙы юғалтһаҡ, киләсәгебеҙ өсөн ҙур енәйәт яһаған булырбыҙ", - тип ул башҡорттарҙы иҫкәртә.

Әхмәтзәки Вәлиди төрки халҡының ассимиляцияға бирелеү сәбәбен эҙләй һәм уны ғәскәрлектә, юлбашсы артынан эйәрергә ғәҙәтләнеүендә күрә. Был фекер француз тарихсыһы Леон Каендыҡы. Беренсе тапҡыр ул Ә. Вәлиди тарафынан "Төрк вә татар тарихы" китабында ҡулланыла. Ә был мәҡәләһендә ғалим бөрйән башҡорттарының пассивлығын тәнҡитләү өсөн Л. Каенға һылтанмалар эшләй.

Ҡарап үтелгән мәсьәләләрҙән тыш, "Бөрйән башҡорттары араһында" мәҡәләһенә башҡорт, ғөмүмән, төрки халыҡтарының тарихы, этнографияһы буйынса мәғлүмәттәр, Вәлидиҙең бөрйән башҡорттарының йәшәү рәүеше хаҡындағы күҙәтеүҙәре ингән.

Шулай итеп, Ә. Вәлидиҙең "Бөрйән башҡорттары араһында" тигән хеҙмәте көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһен ҡуҙғата һәм революция алдынан башҡорт йәмғәтселегенә ҙур йоғонто яһай. Ул башҡорттар тарихын өйрәнеүҙә төүге аҙым була.

**Әхәт СӘЛИХОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### ХАНЛЫҠТАР

**2. Чердын (Шырҙан) ханлығы**

XIX быуат һәм XX быуат башы археологтары һәм тарихсылары тәүге осорҙа хәҙерге коми-пермяктар һәм удмурттар йәшәгән өлкәләрҙә уғыр ҡәбиләләре йәшәп, улар киткәндән һуң бында коми-пермяктар һәм удмурттар килгән тип иҫәпләгән. XX быуаттың 30-40-сы йылдарында был фекергә А.Ф. Теплоухов (1924) һәм А.В. Шмидт (1927) ҡушылған. Д.П. Европеус Боҙло океандың төньяғынан алып Ока йылғаһына тиклем, урыҫтар килгәнсе ҡеүәтле һәм күп һанлы халыҡ йәшәгәнен иҫбатлай. Был халыҡ йәшәгән илдең ошо өлөшө урыҫ йылъяҙмаларында Бөйөк Пермь тип атала. Исландия сагаларында был ил Beormas (Бгормасъ, тип уҡырға) һәм Біармландъ тип яҙыла. Унда шулай уҡ батшаларҙың һәм яугирҙарҙың исемдәре килтерелә, мәҫәлән, "Tyrkjar" һәм "Asiamenn", йәғни "Турок" һәм "Азиат".

Халҡыбыҙ тарихында хаҡһыҙ рәүештә онотолоуға дусар ителгән эре дәүләттәр бар. Р. Исламшин яҙыуынса: "Чусовой вогулдары - Бирамия дәүләтенең иң төп ырыуы "өбө"ләрҙең вариҫтары булып иҫәпләнә, уларҙың биләмәһе урта Уралға тиклем һуҙылған. Был төрки телле халыҡтың иң ҙур өлөшөн өпәй башҡорт ырыуы тәшкил иткән..."

Чердын (Шырҙан) ханлығына тиклем Вятка һәм Кама йылғалары буйлап йөҙөп барып етергә мөмкин, был ерҙән төньяҡ башҡорттарының Ғәйнә ере яҡын ғына. Бынан Искор (Искер) ҡалаһына тиклем ҡул һуҙырлыҡ ара ғына. Искер башҡортса "иҫке ер" тигәнде аңлата. Урыҫ йылъяҙмаларында Искер 1472 йылдан телгә алына башлай, тарихи материалдарҙа ул IX быуаттан билдәле. Тарихсылар В.Н. Берх менән В.А. Оборин был хаҡта ентекле итеп яҙа: "Боронғо Искор эре хәрбиоборона үҙәге була, был унда табылған хәрби материалдарҙы тәшкил иткән ҡомартҡылар менән иҫбат ителә. Искор ҡаласығының үҙәк өлөшө 400 кв.м тәшкил итә... Урындағы халыҡ был урынды кенәз урыны тип атаған. Был урын татарҙарға ҡаршылыҡ күрһәткән легендар батша Кора (Ҡара) исеме менән бәйле". Урыҫ риүәйәттәрендә Ҡара бейҙең төньяҡ олоҫтары менән генә түгел, Урал тауҙары, Обь, Иртыш, Тубыл ерҙәре менән дә идара итеүе хаҡында әйтелә. Ҡайһы бер Мәскәү тарихсылары Кора (Ҡарала) ханда татарҙарға (монголдарға) ҡаршы көрәшкән урындағы "фин-уғыр"ҙы күрергә теләй. Унын башҡорт ханы булғанлығын улар асыҡтан-асыҡ танырға баҙнат итмәй.

**(Дауамы бар).**

✔ ***Университет үткәргән бөтә саралар, башҡорт филологияһы факультетында эшләнгән эштәр инициативалы йәштәр тәкдиме менән атҡарыла.***

# СИТ ТАРАФТАРҘА, ЙӘШТӘРЕНӘ

## был милләттең

(Башы 1-се биттә).

**Егеттәр техник һөнәр үҙләштерергә тейеш, тигән ҡалыплашҡан ҡараш бар. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетын һайлаған егеттәр был турала нимә уйлай?**

**Айтуған Йәнбирҙин:** Ошо факультет тураһында мәктәп йылдарынан уҡ белә инем. Рус һәм башҡорт теле буйынса уҡытыусыларым тәҡдим иткәс, университет тураһындағы мәғлүмәттәрҙе ҡарап сыҡҡас, ошонда уҡырға инергә теләк тыуҙы. Хәҙер инде дүртенсе курсты тамамларға торғанда ышанысым аҡланыуын тоям һәм юғары уҡыу йортон дөрөҫ һайлағанмын, тип әйтә алам.

**Айбулат Сәсәнбаев:** Мин дә ун беренсе синыфты тамамлап барғанда юғары уҡыу йорто тураһында уйлана башланым. Шунан буласаҡ һөнәремде тап ошо факультетта алырға тейешлегемде аңланым. Педагогия университеты - ул уҡытыусылар ғына әҙерләүсе түгел, ә йәш кешегә бик күп мөмкинлектәр асыусы юғары уҡыу йорто. Мин әҙәбиәт, ижад, журналистика менән ҡыҙыҡһынғас, тап башҡорт филологияһы факультеты был юҫыҡта үҫешергә мөмкинлек бирер, тип уйлап килдем һәм яңылышманым.

**Байрас Азаматов:** Сибай ҡалаһының гимназия-интернатына Башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты Зәки Әлибаев уҡыусылар менән осрашыуға килде. Бик ҡыҙыҡлы сығыш яһаны ул, юғары уҡыу йорто тураһында ла һөйләне, бәхәсләшеп тә киткәйнек хатта. Шунда ошо юғары уҡыу йорто менән ҡыҙыҡһынып киттем, факультет үткәргән "Илһам" йәш ижадсыларҙың республика конкурсында ҡатнашып, бында уҡыған студенттарҙың эшмәкәрлеге менән танышып, үҙем дә ошо мөхиткә уҡырға килде. Бөтә егеттәргә лә мотлаҡ техник һөнәр һайларға кәрәк тимәгән, һәр кем күңеленә яткан эшкә өйрәнергә тейеш.

**Университеттың башҡорт филологияһы факультеты студенттарын һәр яҡлап та талантлы йәштәр тип беләбеҙ. Йәштәрҙең һәләттәрен үҫтереү өсөн ниндәй шарттар тыуҙырылған бында?**

**Айбулат Сәсәнбаев:** Башҡорт филологияһы факультетына тәү сиратта ижадҡа яҡын йәштәр уҡырға килә, улар әҙәбиәткә ғашиҡ, үҙҙәре лә шиғыр йә хикәйәләр ижад итә. Улар өсөн бында филология фәндәре кандидаты Зәки Әлибаев етәкселек иткән "Тулҡын" әҙәби берекмәһе эшләй, мин үҙем ул берекмәнең старостаһы булып торам. Беренсе курсҡа уҡырға килгәндә уҡ йәштәрҙе әҙәби берекмә эшенә йәлеп итәбеҙ, айына бер тапҡыр шулай уҡ "Тулҡын" тип аталған гәзитебеҙҙе баҫтырабыҙ. Мәктәп йылдарында уҡ уҡый иткән йәштәр бында килеп фекерҙәштәр таба, төрлө осрашыуҙарҙа билдәле шәхестәр менән аралашып, фәһем ала, конкурс һәм ижади сараларҙа һәләттәрен үҫтерергә һәм оҫталыҡтарын арттырырға мөмкинлек бирелә уларға.

**Айтуған Йәнбирҙин:** Башҡорт филологияһы факультетында, ысынлап та, теләге булған һәр кемгә сифатлы юғары белем биреүҙән тыш, үҙе теләгән шөғөл менән булырға ла мөмкинлектәр тыуҙырыла. Мәҫәлән, М. Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры актеры Илнур Лоҡманов етәкселегендә "Корос" халыҡ фольклор-театр коллективы эшләй. Студенттар төрлө спектаклдәр һәм фольклор күренештәрен сәхнәләштереп, үҙебеҙҙең университет сәхнәһендә генә түгел, республиканың Әбйәлил, Учалы, Ишембай райондарында, хатта Ҡаҙағстан тамашасылары алдында сығыш яһағандары бар. Мин башҡорт филологияһы факультетының "Ете ырыу" бейеү ансамблендә шөғөлләнәм, икенсе йыл рәттән Ҡазан ҡалаһында үткән Рәсәй вуздары араһындағы Волга буйы фестивалендә беренсе урын алдыҡ. Был фестивалдәге иң юғары баһа булды, сығышыбыҙ барыһының да күңеленә ятты, рухлы йәштәр булыуыбыҙ күренеп тора, тип тә әйттеләр. "Ете ырыу" бейеү ансамбленең бер үҙенсәлеге бар: бейеүҙәрҙе үҙебеҙ һалабыҙ. Ансамбль ағзалары Ләйсән Йәнекәйева һәм Фәдис Иҙрисов бик күп бейеүҙәребеҙҙең авторҙары. "Ете ырыу"ҙың тарихы икеөс йыл элек "Студент яҙы" сараһында сығыш яһарға теләгән йәштәрҙең берләшеүенән башланып киткәйне, хәҙер халыҡ ансамбленә тиклем үҫеп етте.

**Айбулат Сәсәнбаев:** Мәктәптә белем алған осорҙа Сибайҙа Балалар сәнғәт мәктәбендә ҡурай класын тамамлағайным, бында килгәс тә был музыка ҡоралында башҡарыу оҫталығымды камиллаштырыуҙы дауам итәм. "Дарья" халыҡ музыка ҡоралдары ансамблендә ҡурайҙан тыш ҡумыҙ, думбырала уйнарға өйрәндем. Башҡорт филологияһы факультетының Розалия Солтангәрәева етәкселегендәге "Йәш сәсәндәр мәктәбе" менән дә Ҡаҙағстанда, Ҡалмыҡстанда һәм башҡа ерҙә үткәрелгән сараларҙа ҡатнашыу бәхете тәтене.

**Байрас Азаматов:** Башҡорт филологияһы факультеты студенттары белем кимәле йәһәтенән дә беренселәр рәтендә. Фән һәм проект эштәре буйынса бик әүҙемдәр, Рәсәй һәм халыҡ-ара мәғариф форумдарында ҡатнашалар. 2016 йыл бигерәк тә мәғариф форумдарында ҡаҙанған уңыштарыбыҙға бай булды. "Кымыҙ-брейк" проектымды Бөтә Рәсәй кимәлендәге ике мәғариф форумында лайыҡлы баһаланылар, Зарина Мырҙағолова "Ҡумта" мәғариф майҙансығын алып бара, "Урал мираҫы" форумында волонтерҙар булып ҡатнашыусылар бар. Һәр саранан үҙебеҙгә белем, фәһем, тәжрибә алып ҡайтабыҙ. Үткән йылдың ноябрь айында үткән "Рәсәй студенты - 2016" Бөтә Рәсәй милләт-ара форумында университеттан дүрт студент ҡатнаштыҡ. Шунда Хәрби-тарихи фәндәр академияһы ағза-корреспонденты Саид-Хәсән Мусхаджиевтын: "Икенсе көн башҡорт йәштәренең фекерҙәрен тыңлайым һәм улар, ысынлап та, тәбиғәт менән гармонияла үҫешкән, милли үҙаң нимә икәнен аңлаған, рухлы халыҡ булыуына инандым. Был халыҡтың киләсәге бар", - тип әйтеүе һаман иҫтә.

**Әлеге көндә ниндәй яңы проекттар буйынса эшләйһегеҙ һәм ниндәй сараларҙа ҡатнашырға йыйынаһығыҙ?**

**Айтуған Йәнбирҙин:** "Белемле Башҡортостан" тигән проектыбыҙҙы дауам итәбеҙ һәм башҡортса хаталы яҙыу ҡүренһә, кәрәкле инстанцияларға мөрәжәғәт итеп, төҙәттәрәбеҙ. Был даими проект Терминология комиссияһы ағзалары булған уҡытыусыларыбыҙ менән берлектә алып барыла. Шулай уҡ университеттар араһында үткәрелгән төрлө ғилми конференцияларҙа, конкурстарҙа ҡатнашыуҙы дауам итәбеҙ. Мин шулай уҡ грепплинг менән шөғөлләнәм һәм спорт ярыштарына йөрөйөм. Әйткәндәй, беҙҙең башҡорт филологияһы факультетында белем алыусы ҡыҙҙар ҙа егеттәр кеүек бик әүҙемдәр. Яҡшы уҡыйҙар, матурлыҡ конкурстарында ҡатнашалар. Республика, Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдәге гүзәллек конкурстарында еңеп, башҡорт ҡыҙҙары данын яҡлап йөрөүселәр улар.

**Айбулат Сәсәнбаев:** Мәғлүм булыуынса, быйыл М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетына нигеҙ һалыныуға 50 йыл. Ул 1967 йылдан 2000 йылға тиклем институт тип йөрөтөлә, 2006 йылда башҡорт халҡының бөйөк мәғрифәтсе шағиры Мифтахетдин Аҡмулла исеме бирелә. Был оло датаны билдәләп, йыл дауамында беҙҙең вузда бик күп саралар ойоштороу ҡаралған. Әле 25 ғинуарҙа "Студенттар көнө"ндә бик сағыу концерт һәм студенттар, уҡытыусылар өсөн төрлө ярыштар үткәрелде. Вуз ректоры Рәил Әсәҙуллин дә унда бик әүҙем ҡатнашты, сығыш яһаны һәм байрам кисәһе тортлап сәй эсеү, салют менән тамамланды.

**Байрас Азаматов:** Университет үткәргән бөтә саралар, башҡорт филологияһы факультетында эшләнгән эштәр инициативалы йәштәр тәкдиме менән атҡарыла. Беҙҙең нимәлер эшләргә теләк белдереүҙе күреп, һәр ваҡыт күтәрмәләргә әҙер булған барлыҡ уҡытыусыларыбыҙға - иң тәүҙә университет ректоры Рәил Әсәҙуллинға, факультетыбыҙ етәксеһе Луиза Сәмситовағa рәхмәтлебеҙ. Бик күп мәғариф форумдарында БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы ярҙамы менән ҡатнашабыҙ, уларға ла рәхмәт.

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы университеттары исемлегенә индерелгәйне. Был студенттарға ниндәй яңы мөмкинлектәр асты?**

**Айбулат Сәсәнбаев:** Беҙ уҡыған юғары уҡыу йорто Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы университеттары исемлегенә индерелгәс, студенттар, аспиранттар, докторанттарға ошо исемлеккә торған башҡа илдәрҙең вуздарында бушлай белем алыу мөмкинле бирел-



✓ ***Юғары кимәлдәге мәсьәләләргә күсерҙән алда һәр кем эште үҙенән башларға тейеш. Тел тигәс, ул милли үҙаңды күҙ алдында тота. Үҙең милли үҙаң нимә икәнен белмәһәң, балаларыңа туған телдә өйрәтеүҙе кәрәк тип тә тапмайһың.***



# ҠАРАП,

## киләсәге бар, тиһендәр...

де. Шуға хәҙер М. Аҡмулла исемендәге университет дипломын, йә иң оҙайлы ваҡыт уҡыған вуз дипломын һәм Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының берҙәм дипломын алырға була. Был ойошмаға Рәсәй, Ҡытай, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан илдәренең юғары уҡыу йорттары инә. Тимәк, ошо илдәрҙәң вуздарында белемеңде камиллаштыра алаһың.

**Айтуған Йәнбирҙин:** Беҙҙең башҡорт филологияһы факультетында ла ошо программа буйынса белемдәрен камиллаштырыусылар бар. Мәҫәлән, Ильяс Сагынбек 3 курста уҡып йөрөй, Мәрәй Күпжанов беҙҙә уҡып бөтөп, хәҙер Аҡтүбәлә башҡорт теленән уҡыта, Вячеслав Чернев Варшавала белемен камиллаштыра һәм шулай уҡ поляк студенттарына башҡорт телен өйрәтә. Беҙҙең студенттар ҙа Ҡаҙағстандың Аҡтүбә ҡалаһындағы Жубанов исемендәге төбәк дәүләт университетына һәм С. Баишев исемендәге университетҡа, Таулы Алтайға стажировка үтергә йөрөй. Был бәйләнештәр халыҡ-ара ғилми конференция, олимпиада, конкурстар үткәреүгә лә булышлыҡ итә. Төрлө сараларға саҡырыуҙар алып торабыҙ.

**Байрас Азаматов:** Былар барыһы ла йәштәргә тиҫтерҙәре менән аралашырға, төрлө файҙалы танышлыҡтар булдырырға ярҙам итә. Беҙ мәғариф форумдарында, ғилми конференцияларҙа, мәҙәни сараларҙа булһынмы, теләктәштәр, фекерҙәштәр һәм кәрәкле бәйләнештәр табабыҙ. Әлеге көндә факультетыбыҙҙа педагогия фәндәре докторы, профессор Рәйсә Дәүләтбаева проекты буйынса фәнни-ижади лаборатория асылды. Был лабораторияла тауыш, монтаж өсөн тәғәйенләнгән аппаратуралар, компьютерҙар, камера, штатив, телевизор, проекторҙар бар. Бөтә уңайлыҡтар студенттар ҡулланһын һәм һөнәрен арттырһын тигән ниәттә булдырыла. Сөнки, берҙән, замана уҡытыусыһы төрлө техника менән эш итә белергә һәм уҡыусыларҙы мауыҡтырып, дәрестәр үткәрә алырға тейеш. Икенсенән, шул уҡ Рәсәй һәм башҡа илдәрҙең педагогия вуздары менән бәйләнешкә сығып, фекер алышыуҙар, онлайн-конференциялар, оҫталыҡ дәрестәре, лекциялар үткәрәбеҙ.

▸ **Педагогия университетын тамамлаусылар етерлек булһа ла, ҡыҙғаныусҡа күрә, бик һирәктәр генә мәктәпкә эшкә бара. Һеҙ киләсәктә мәктәптә уҡытырға теләйһегеҙме?**

**Айтуған Йәнбирҙин:** Ысынлап та, мәктәпкә эшкә барырға теләк белдереүселәр күп түгел. Сөнки уҡытыусының социаль хәле, йәмғиәттәге урыны, эш хаҡы йәш кешеләрҙе ҡәнәғәтләндерерлек түгел. Үҙем вузды тамамлағандан һуң ҡайҙа эшкә төшөрөмдө белмәйем, әммә башҡорт филологияһы бүлегендә уҡығас, белемемде һәм туған телебеҙҙе ҡарата һөйөүемде балаларға, йәштәргә лә еткерергә теләр инем. Әлеге көндә мин Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Башҡорттар" тапшырыуын алып барам. Бәлки, киләсәктә журналистика өлкәһендә эшемде дауам итермен. Әммә ҡайһы өлкәлә эшләһәм дә башҡорт теленең даирәһен арттырыу, уның бәҫен күтәреү төп маҡсатым буласаҡ.

**Айбулат Сәсәнбаев:** М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаусы белгестәр алған һөнәрҙәре буйынса эшләйҙәр ул. Миҫалға, йыл да үткәрелә килгән "Йыл уҡытыусыһы" республика конкурстарында ҡатнашыусы педагогтарҙың күбеһе беҙ уҡыған вузды бөтөргән. Мин үҙем башҡорт-төрөк теле бүлегендә белем алам, киләсәктә тәржемәсе булып та, уҡытыусы булып та эшләй алам. Әлегә ҡайһы юлдан китеремде аныҡ ҡына әйтә алмайым. Бөгөнгө көндә уҡытыусының төп һөнәри талаптарының береһе - ул бөтәһе менән дә уртаҡ тел таба белеү. Быға беҙҙе уҡыу барышында өйрәтәләр. Беренсе курста республиканың төрлө районларына сығып, ауыҙ-тел ижадын йыйҙыҡ, икенсе курста диалектологик практика үттек, өсөнсө курста балалар лагерында тәрбиәсе булып эшләнек. Дүртенсе һәм бишенсе курстарҙа төрлө мәктәп, гимназия, лицейҙарҙа дәрестәр үткәрә башлайбыҙ. Бына шулай төрлө кешеләр менән аралашабыҙ: ауылда йәшәгән оло инәй менән дә, мәктәптә уҡыған бәләкәй уҡыусы менән дә һөйләшергә һүҙебеҙ булырға тейеш. Ә тормошта бындай сифатың булыу ҡамасау итмәй, ҡайҙа эшләһәк тә, һәр коллективта үҙебеҙҙе дөрөҫ ҡуя, бөтәһе менән дә аңлаша белергә тейешбеҙ.

**Байрас Азаматов:** Мин әле икенсе курста ғына белем алам, шуға, юғары уҡыу йортон тамамлағас, мәктәптә балаларға белем бирерменме, әллә икенсе юҫыҡтараҡ эшләрменме, белмәйем. Әлегә бары студент йылдарының ҡәҙерен белеп, бирелгән һәр мөмкинлекте файҙаланырға, төрлө юҫыҡта үҙемде һынап ҡарарға, белемемде арттырырға тырышам. Шуға йәштәрҙең мәғариф форумдарында, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашам.

▸ **Шулай ҙа, буласаҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары булараҡ, ошо өлкәләге актуаль проблемаларға иғтибар итмәй ҡалмайһығыҙҙыр. Мәғариф өлкәһендәге туған телгә бәйле хәл итәһе мәсьәләләр тураһында уйланғанығыҙ бармы?**

**Айбулат Сәсәнбаев:** Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын бөгөн иң борсоғаны - балаларҙың туған телен белеү кимәле һәм дәрестәр һаны кәмеүе. Был мәсьәлә беҙҙе лә уйландырмай ҡалмай, әлбиттә. Дәрес сәғәттәре әҙ булғанлыҡтан, балаларҙың башҡорт теле буйынса белеме аҡһай башлаған икән, беҙ вузды тамамлап сығыуға хәлдәр нисек булыр? Дөрөҫөн әйткәндә, Берҙәм дәүләт имтихандарына яҡшы әҙерләнһен, тигән һылтау менән 1-се кластан уҡ балаларына рус телен туған тел булараҡ уҡытырға рөхсәт итеүсе ата-әсәләрҙән башларға кәрәк эште. Беҙҙең быуын йәштәренә лә шулай уҡ үҙ теләге менән башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыу йәки уҡымау мөмкинлеге бирелгәйне. Әлеге көндә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә өҫтөнлөк биреүебеҙ өсөн бер тапҡыр ҙа үкенгәнем булманы, сөнки минең туған телемде яҡшы белеүем рус телен йәки сит телдәрҙе өйрәнеүгә бер нисек тә кире тәьҫир итмәне, киреһенсә, ярҙам ғына итте. Ата-әсәләр балаға туған телен өйрәтеүҙең мөһимлеген аңлаһа, Мәғариф министрлыҡтарына уларҙың теләктәре еткерелер һәм ҡайһы бер хәл ителәһе проблемалы һорауҙар үҙенән-үҙе юҡҡа сығыр ине.

**Айтуған Йәнбирҙин:** Республиканың төрлө учреждениеларында башҡорт телен белгән белгестәр етешмәй. Мәктәптә булһынмы, медицина учреждениеһымы, йә башҡа ойошмаларҙамы, башҡортса аңлаған йәш белгестәр юҡ һанында. Был Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында башҡорт теле уҡытылмауы менән бәйле. Әйтергә кәрәк, бары тик М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ғына бөтә факультеттарҙа ла башҡорт телен уҡытыуҙы һаҡлап алып ҡалған. Беҙҙә башҡорт филологияһы факультеты студенттары ғына түгел, буласаҡ физиктар ҙа, математиктар ҙа, физкультура уҡытыусылары ла башҡорт теле буйынса тейешле сәғәттәрҙе уҡый. Сөнки бер нисә телде белеү яҙыҡ түгел, башҡорт телен өйрәнеүҙең дә кәрәге һәр ваҡыт тейеүе бар. Ни өсөн педагогия университетында был тәртип һаҡланған, ә башҡа юғары уҡыу йорттарында был кәрәкле тип табылмаған? Ошо һорау борсоуға һала, сөнки ниндәй өлкәлә генә белем алһа ла кеше туған телен уҡырға тейеш.

**Байрас Азаматов:** Улай юғары кимәлдәге мәсьәләләргә күсерҙән алда һәр кем эште үҙенән башларға тейеш. Тел тигәс, ул милли үҙаңды күҙ алдында тота. Үҙең милли үҙаң нимә икәнен белмәһәң, балаларыңа туған телдә өйрәтеүҙе кәрәк тип тә тапмайһың. Шуға ла мин оло апай-ағайҙарға, йәштәштәремә, тәү сиратта үҙегеҙ башҡорт телен өйрәнеүҙең мөһимлегенә төшөнөгөҙ, тип әйткем килә. Шунан был хәҡиҡәтте балаңа ла аңлатып үҫтерһәң, артабан ул да, һин дә мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүҙең кәрәклеге-кәрәкмәгәне тураһында һүҙ ҙә ҡуҙғатып тормаясаҡһың. Был инде милли мәғариф өлкәһендәге хәл ителәһе бик күп проблемаларҙың аҫҡысы буласаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Уҡытыусы тип аталырға лайыҡлы шәхестәр әҙерләгән юғары уҡыу йорто үҙе лә абруйлы, алдынғылар рәтендә булырға тейеш. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты был йәһәттән бер ҡасан да һынатҡаны юҡ һәм илле йыл элек тә, бөгөн дә ул йәш белгестәр әҙерләүсе иң яҡшы уҡыу йорттарының береһе. Был вуздың бөтә факультет студенттары ла маҡсатлы, ә башҡорт филологияһы факультеты студенттары - милләтебеҙҙең киләсәген тәрбиәләйәсәк йәш белгестәр. Уҡыуҙа ла, йәмәғәт эштәрендә лә уңыштарға өлгәшкән студенттар менән әңгәмәбеҙ гәзит уҡыусыларға һәм киләсәген педагог һөнәре менән бәйләргә теләүсе йәштәргә файҙалы булыр, мөгайын.**

Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.

ӘЙТӘГҮР!



# ЗАМАНДАН АЛДА ЙҮГЕР

**Заманалар үҙгәрҙе, тип ҡабатларға яратабыҙ һәм уның менән бергә кешеләр ҙә үҙгәреш кисереүен билдәләйбеҙ. Ә бит һәр заманды йәш быуын кәүҙәләндерә. Бөгөнгө заман һәм йәштәр ниндәй һуң?**

***Филзә ҒӘРИФУЛЛИНА, Өфө ҡалаһы:*** Беҙ йәш саҡта бөтә нәмәне яйлап эшләп таба инек. Мәҫәлән, бер йыл эшләйһең дә, телевизор һатып алырға аҡса йыяһың, икенсе йылына - балаҫ, унан бер нисә йыл һалып барған аҡсаңа машина һатып алырға хыялланаһың. Ә хәҙер йәштәр барыһын да бер юлы тиҙ генә ҡулына төшөрөргә, тиҙ генә аҡса эшләп байырға уйлай. Шуға улар бөгөнгө көн менән генә йәшәп, киләсәген ҡайғыртмай һымаҡ тойола. Бәлки, дөрөҫ эшләйҙәрҙер, сөнки уларҙы беҙҙең быуын кешеләрен "Коммунизм еткәс, етеш тормошта рәхәтләнеп йәшәрһегеҙ", тип алдаштырған һымаҡ алдатып булмай. Бөгөн уларға бөтә тарафтар ҙа асыҡ, әммә үҙ юлыңды табыуы ғына ауыр. Бер генә һөнәр үҙләштереү ҙә етмәй, биш-алты йылдан һин алған белем иҫкерә һәм бөтөнләй икенсе юҫыҡта белемеңде камиллаштырырға тура килә. Бына шулай ваҡиғалар артынан ҡыуып, йәштәрҙең ғаилә ҡорорға, балалар тәрбиәләргә ваҡыты ла ҡалмай. Бәлки киләсәктә был хәл үҙгәрер һәм йәштәребеҙ заман ағышы артынан бармаҫҡа, ә алдан йүгерергә кәрәк икәнен аңлар. Шунһыҙ булмай...

***Әлмирә ҒӘЛИУЛЛИНА, Бөрйән районы:*** Бөгөнгө замандың мөмкинлектәре күп, әлбиттә, ләкин айырыуса йәштәр өсөн үҙ юлын табыуы ҡатмарлы. Үҙем баш ҡала колледждарының береһендә белем бирәм һәм балалар менән тығыҙ бәйләнештә эшләгәс, уларҙың кисерештәрен яҡшы беләм. Күптәре күңеленә яҡҡан һөнәрҙе һайлай алмай, бер колледждан ҡыуылып, икенсеһенә уҡырға инеп, унда уҡырға теләмәй, өсөнсөһөнә күсеп йөрөй. Бында алған һөнәрең буйынса эшләйһеңме, тигән һорауҙарға аныҡ ҡына яуап та бирә алмайҙар. Шуға күрә, бәләкәйҙән балаларҙы үҙаллылыҡҡа, аныҡ маҡсаттар ҡуя белергә өйрәтеп үҫтерергә кәрәк. Сөнки кеше үҙе шәхес булараҡ формалашҡан икән, заман ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, бөтә ауырлыҡтарҙы ла, еңеллектәрҙе лә күтәрерлек көс таба аласаҡ үҙендә. Заман үҙенә ышанған, аныҡ маҡсаттар менән йәшәгән, нимә кәрәк булыуын белгән кешеләр өсөн бер ҙә ауыр түгел. Сөнки теләгәнгә өлгәшеү өсөн бөтә мөмкинлектәр асыҡ.

***Илназ ӘХМӘТШИН, Стәрлетамаҡ ҡалаһы, уҡыусы:*** Заман һәр ваҡыт үҙгәреп тора, кеше тормошон яҡшыртыуға ҡоролған яңы технологиялар ғына түгел, бөтә нәмә лә үҫеш ала. Шуға, бер юлда ғына ҡалмаҫҡа, һәр яҡлап камиллашырға, үҙеңде шәхес булараҡ үҫтерергә кәрәк, тип уйлайым. Заман ниндәй генә булыуға ҡарамаҫтан, минең йәштәштәрем тәртипле, насар ғәҙәттәрҙән арынып, спорт менән шөғөлләнеүсе сәләмәт тормош яҡлы кешеләр. Күптәре бөгөнгө көндә тырыш кеше аҡса эшләй, ә аҡсалы кеше уңышлы булыуын аңлайҙар. Шуға заман да уңышлы кешеләрҙеке, бары тик үҙ маҡсаттарына өлгәшә белгәндәр генә уға яраҡлашып йәшәй ала. Юҡҡа ғына хәҙерге йәштәр тураһында үҙҙәре теләгәнде генә эшләп йәшәргә яраталар, тип әйтмәйҙәрҙер ололар. Беҙ өлкән быуын кешеләре кеүек күңелебеҙгә ятмаған һөнәрҙе үҙләштереп, һуңынан ғүмер буйы шул эштә эшләп йәшәргә ысынлап та теләмәйбеҙ. Шуға бөтә нәмә беҙҙең теләктәр һәм хыялдар кеүек тиҙ генә үҙгәрә, һәр кем тырышып тормошта үҙ урынын эҙләй һәм үҙе яраткан өлкәлә уңыш ҡаҙанырға ынтыла.

Әминә ШӘМСЕТДИНОВА яҙып алды.

**✓ *Ҡулдарға һәм йөрәккә көс өҫтәлмәне. Эш күп - яҙғы сәсеү мәшәҡәттәре башланды. Ерҙәге иң ауыр эш. Һабан артынан дымлы бураҙна буйлап ун дүрт-ун биш йәшлек үҫмерҙәр өҫтөрәлде.***



Талха ҒИНИӘТУЛЛИН

# БРИГАДА ӨЙРӘҺЕ

Хикәйә

Ташлы-ҡаялы бейек булмаған ҡыуаҡтар янынан, шунан асыҡ яландар аша үтеп, төш етер алдынан улар урман менән ҡапланған тау битенә яҡынлашты. Осраған шишмәнән туйғансы һыу эсеп, малайҙар был тау битенә оҙаҡ барҙы - ҡояш һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә өҫкә күтәрелә ине. Ярайһы текә тау тирәләй әйләнгәндә тауҙар тапҡырында күк йөҙөн ҡара болоттар ҡапланы. Айнур мыжый һәм, әсәйемә барғым килмәй, өйгә ҡайтайыҡ, тип ҡабатланы. Вәзих ҡустыһын етәкләп, алға һөйрәй һәм әрләшә:

- Атла! Бәләкәй саҡтағы ише күтеңдә шыуышаһың килһә, шыуыш!

- Әсәйемә барғым килмәй, ҡайтайыҡ! - тип ҡабатлай малай һәм туҡтамай илай.

Һалҡын ямғыр яуа башланы. Тауҙың түбәһенә менеп еткәнсе күҙ бәйләнде. Айнур быуынһыҙға әйләнде, арыны, иланы һәм юлға ултырырға йәки ятырға теләне. Аршаға яҡтыла барып етергә ниәтләнеп, Вәзих уны һаман һөйрәй. Һөйрәй торғас, башына бер уй килде: тау түбәненә йүгерергә, йүгерһәң Аршаға тиҙерәк барып етәһең, әммә Айнур менән йүгереп булмай. Иң яҡшыһы - уны тау башында ҡалдырырға кәрәк. Әсәһе менән килеп алырға. Вәзих уны юлдан ситкәрәк алып сыҡты ла бейек шыршы ағасы аҫтына ултыртты:

- Ошонда ултырып тор. Мин әсәйем янына йүгереп кенә барып киләм. Һине икәүләп килеп алырбыҙ.

- Ҡайтайыҡ, - тип мыжыны малай.

Ҡустыһын шыршы төбөндә ҡалдырып, Вәзих тау түбәһенә йүгереп төшөп китте. Арша йүнәлешенә йүгерәм, тип уйлай ине ул. Һалҡын, еүеш таштар аяғын яндырҙы, бармаҡтарын, табанын ауырттырҙы, әрнетте. Юлда таштар әҙәйһә, еүеш балсыҡта аяғы тайҙы.

Ҡапыл юл үргә китте. Ул, күрәһең, күрше тауға күтәрелә ине. Ошо тауҙы менеп етһә, Аршаны күрермен, тип ышанды Вәзих. Әммә һыртҡа менеп еткәйне, эңерҙә шул уҡ ҡара урман һәм тауҙар ине, улар ҡара тулҡын рәүешендә офоҡҡа барып тоташа. Ирекһеҙҙән, туҡтаны, хәл алды, шулай ҙа барған юлы барыбер ҙә Аршаға килтереп сығарыр әле, тип, артабан йүгерҙе.

Ваҡ ямғыр ҡар менән алышынды. Унан ҡар бөртөктәре эреләнде, ауырайҙы, шыршы өҫәренә ятты, бөрөләнеп килгән ҡайындарға ҡунды һәм тирә-яҡты ап-аҡ итте.

Урал һыртында апрель ҡары ғәжәп түгел ине. Ҡарҙан ҡото алынған Вәзих туҡтаны, бөтә тәне менән ҡалтырана-ҡалтырана, ҡымшанмай баҫып торҙо һәм "Әсәй, һин ҡайҙа?" тип илап ебәрҙе, шунда ғына ҡустыһын ҡалдырмаҫҡа кәрәклеген аңланы. Кирегә, тау түбәненә йүгерергә! Икеһенә ул тиклем ҡурҡыныс булмаҫ, ҡышҡы һыуыҡтарҙа яғылмаған өйҙә һыйыныуҙан ултырған һымаҡ, шыршы аҫтында ла бер-береһен йылытып, ҡар яуып бөткәнен көтөп ултырырҙар ҙа, иртәнсәк ҡайтыу яғына йүнәлерҙәр. Юлда берәйһе осрап та ҡуйыр әле. Аршаға барһа - әсәләре янына илтер, кирегә булһа - ауылдарына... Һәм Вәзих үргә атланы. Әммә һыртҡа менәменә, уйлағанса, ҙур шыршы янына яҡынлай-яҡынлай, ялан аяҡтары аҫтында ташлы юл түгел, ә ҡар, ҡар аҫтында былтыр ҡойолған серек япраҡтар ҙа, үле үлән икәненә аптыраны. Юлды эҙләп, һулға ташланды, унан - уңға, әммә юл юҡ ине. Шунан ул ҡысҡырырға тотондо: "Айнур, һин ҡайҙа, Айнур?" Уйынса, ошонан Айнур ҡалған ҙур шыршы ҡул һуҙымында ғына булырға тейеш ине. Бәлки, ул ултырған-ултырған да ҡайтыу яғына атлағандыр? Үәт иҫәр, яңғыҙы ауылға етә алмай бит инде.

Ҡурҡыуҙан хәле бөтөп, тамам арып, артабан түбәлеккә ул дүрт аяҡлап шыуышты. Шыуышты һәм "Әсәй, әсәй!" тип һөрәнләне. Оҙаҡламай тауышы ла сыҡмай башланы. Өшөүҙән, ҡурҡыуҙан туҡтауһыҙ ҡалтыранды, тырнаҡтарын, тубығын аҡтарып бөттө, йөҙө менән ҡарҙы һөрҙө. Уның берҙән-бер теләге - ергә ятып күҙҙәрен йомоу ине. Ул әсәһенең сарыҡтары ише йыуан шыршы төбөнә шыуышып барып етте. Ҡосаҡланы ла, бите менән уға терәлде. Ул үҙенең был аяуһыҙ донъянан нисек һәм ҡайҙа китеп барғанын аңламай ине...

* * *

Еңеү тураһындағы хәбәрҙе иң беренсе булып колхоз етәкселеге белде - райондан идараға шылтыратҡандар. Унан уҡытыусылар, уҡыусылар, башҡалар ишетте. Ас ҡыштан тамам хәлһеҙләнгән, арыған ауыл кешеләренең күбеһенең, хатта үҙ тормошона битараф ҡарағандарҙың, был яңылыҡҡа әллә ни иҫе китмәне, ҡайһылары күңелендә, әлбиттә, шатлыҡ, ниндәйҙер өмөт уятты. Ауыл советы бинаһы ҡыйығындағы уңып, теткеләнеп бөткән флагты яңы сепрәккә алыштырҙылар. Һуғышта үлгән йәки хәбәрһеҙ юғалған фронтовик ғаиләләренә колхоз берәр килограмм арыш оно таратты. Ҡатындары, әсәләре, нишләп улай бик әҙ бүләһегеҙ, балалар ас бит, тип ҡәнәғәтһеҙлек белдергәс, колхоз башлығы:

- Бөтә ондо ла хәҙер таратһам, сәсеүселәргә нимә ашатам? - тип яуапланы. - Унан бесән китә, ураҡ...

Һуғыштан Сабрай Низаметдинов ҡына ҡайтты. Ҡатыны ла, балалары ла уны был арала көтмәгәйне. Юлында осраҡлы тап булған аттан төштө лә, яралы аяғында ныҡ аҡһап, өйөнә ыңғайланы һәм ҡапҡа төбөндә уны бөгөн көтмәгән ҡатыны менән йөҙгә-йөҙ осрашты. Сабрай өйөнән әллә ни алыҫта түгел ҡалала госпиталдә ятты, сығарғас, үҙенең ҡайтасағын белдереп яҙған хатынан алда ҡайтып етте. Ирен саҡ танып, ҡатын уның күкрәгенә ҡапланып, сеңләп иларға тотондо. Уға ҡушылып, Сабрай үҙе лә иларға кереште. Шулай илаша-илаша өйгә инделәр... Һалдат ауылдаштарына оҙаҡ ҡына күренмәй ятты, әйтерһең дә, һаман ҡайтмаған. Йылғаға һыуға барыусы бисәләр, түҙемһеҙләнеп, ҡатынынан:

- Тегендә беҙҙекеләрҙе күрмәгәнме, һорашманыңмы? - тип белеште.

- Бер нәмә лә һөйләмәй, төнөн төшөндә ҡысҡыра...- тине ҡатыны.

Тормош, хәҙер инде һуғыштан һуңғы тормош үҙ ағышы менән аҡты. Ауылда һаман да аслыҡ хөкөм һөрә, кешеләрҙең күңеле лә тыныс түгел. Ҡулдарға һәм йөрәккә көс өҫтәлмәне. Эш күп - яҙғы сәсеү мәшәҡәттәре башланды. Ерҙәге иң ауыр эш. Һабан артынан дымлы бураҙна буйлап ун дүрт-ун биш йәшлек үҫмерҙәр өҫтөрәлде. Трактор рычагтарын үҫмер ҡыҙҙарҙың көсһөҙ ҡулдары тотто. Тракторҙар йыш ҡына ватыла, уларҙы ремонтлау өсөн әллә күпме ваҡыт үтә, ә көн көтөп тормай, орлоҡто тиҙерәк ер ҡуйынына һалырға кәрәк.

"Эх, малайҙар, малайҙар! - тип көрһөнә лә бригадир Шәрифулла, шунан, уларҙың уйнап ҡына йөрөр саҡтарында эшкә егелеүҙәре өсөн йәне әсеп, әллә йәлләп, тағы нимәлер әйтергә уҡталып, өҫтәй. - Маладистар, тырышалар".

Үҫмерҙәр, ҡатындар шыйыҡ бригада өйрәһе эсеп, колхоз баҫыуҙарын һөрөп, ашлыҡ сәсһә, көс-хәлдәре булмау сәбәпле бригадир эшкә ҡушмаған, бәләкәйерәк булғанға эшкә ҡатышмаған малай-шалай ерҙән ашарлыҡ нәмә эҙләне. Йәшел төҫтәге, төрлө тәмдәге үлән ашамлыҡ байтаҡ үҫә ине. Парҙа ҡымыҙлыҡ, бесән сапҡан туғайҙарҙа - ҡуҙғалаҡ, йыуа, ҡалҡыулыҡтарҙың ташлы битләүҙәрендә оҫҡон, кәзә кәбеҫтәһе күтәрелә. Ҡайһы бер сәскәләрҙе лә сәйнәнеләр хатта. Йәш кесерткән шулай уҡ ашарлыҡ ине. Ерҙә ҡаҙынырға малайҙарҙың бөтә бригадаһы бергә йөрөнө, хәле ҡалмаған Хәйбулланы ғына эйәртмәнеләр.

Йылға аръяғына ла күҙ ташланылар. Унда муйыл шау сәскәлә ултыра. Әммә ул яҡта әлегә ашарлыҡ бер нәмә лә үҫмәгәнен яҡшы беләләр. Ҡарағат саҡ бөрөләнә, муйыл менән энәлек тә тиҙ генә өлгөрмәй әле. Йылға ла үҙенең йәйге самаһына ҡайтмаған, ташҡын.

Ҡышын да, иртә яҙ ҙа ниндәйҙер ризыҡ табыу менән булған Кинйәк һәр саҡ бригадир ролендә. Ул яңыраҡ ҡына рудникта ағаһында ҡунаҡта йөрөп ҡайтты. Ҡыҙыл йондоҙло осло башлы ҡыҙылармеец ҡолаҡсыны кейеп йөрөй хәҙер. Буденовканы ағаһы бүләк иткән икән. Ағаһының атаһы армиянан ошо баш кейемендә ҡайтҡан һәм бәләкәй малайына биргән. Был бәләкәй малай күптән үҫкән. "Хәҙер, мә, һин кей, Кинйәк", - тигән ағаһы. Кинйәк атаһының үлгәнен белмәй ине. Атаһы аҫылынған көндә ул өләсәһендә булып ҡалды. Әсәһе, атайың һуғышҡа китте, тигән. Ололарҙан бер кем дә уға дөрөҫөн әйтмәне, ә малайҙар бригадаһында Рифат менән Азаттан башҡалары был турала белмәне. Улар ҙа өндәшмәне. Бәлки онотҡандарҙыр ҙа, Кинйәкте фронтовик улы тип йөрөгәндәрҙер... Осло ҡыҙылармеец башлығын Кинйәк бер ҡасан да башынан сисмәне. Бәлки, шуның менән йоҡлағандыр ҙа.

Яҙын клубта кино күрһәтә башланылар. Фашистарҙы еңеү тураһында фильмдар юҡ ине әле, быға тиклем ҡарағандарҙы, аҡтарҙы еңгәндәрҙе - "Чапаев", "Мы из Кронштадта" тигәндәрен әйләндерҙеләр. Бындай саҡтарҙа буденовканың кәрәге бик тейҙе. Кино башланыр алдынан клубта берәйһе мотлаҡ ҡысҡыра: "Кинйәк, утты һүндер!" Кинйәк буденовкаһын сисә лә эскәмйәгә баҫа, сығып торған осо менән лампаның төбөндәге тишекте ҡаплай - кәрәсин лампаһы һүнә һәм экранда һуғыш башлана.

Йылы май килде. Йылға буйы ап-аҡ сәскәләргә күмелде, ауылда муйылдар сәскә атты, тораҡ ул сәскәһен ҡойҙо, йорт алды баҡсаларында миләш, сирень еҫе таралды. Төн уртаһына тиклем һандуғастар һайраны, көндөҙҙәрен кәкүк саҡырҙы... Яҙҙың ошо төрлө тауыш-ауаздарын тыңлап, Рифат уларҙы ҡурай моңона һалырға тырышты... Нисектер бер көн ул Азатҡа инде. Сәй эсәләр ине һәм, һәр ваҡыттағыса, Кәримә апай уны өҫтәлгә саҡырҙы. Ул табала бешкән көлсәнең яртыһын Рифат алдына һалды, мәтрүшкә сәйе ҡойҙо.

- Атайыңдан хәбәр юҡмы? - тип һораны шунан.

- Уға ҡара ҡағыҙ килде бит, - тип яуапланы Рифат.

- Мин ул ҡағыҙҙарға ышанмайым, - тип уфтанды Кәримә апай. - Сабрайға ла ҡағыҙ килгәйне, ә ул госпиталдә ятҡан. Һинең атайың да яраларын төҙәтеп госпиталдә яталыр, хат яҙыр хәлдә түгелдер.

Рифат атаһын онотоп та бара ине инде, әсәһен генә иҫләй. Хатта ул да бала хәтеренән юйыла бара.

- Азат, әйҙә йылға аръяғына сығайыҡ. Кисеү булған ерҙә һыу тубыҡтан ғына, мин Мәғрифә өләсәйҙең сыҡҡанын күрҙем.

- Кинйәккә лә әйтәйекме? - тине Азат.

- Әйтәйек һуң.

Кинйәк элекке кеүек был арала аймаҡта ниңәлер күренмәй ине. Әсәһе, ҡайҙалыр китте, тине. Рудникка ағаһына олаҡҡандыр, бәлки. Икәүләп кенә ҡуҙғалдылар. Һыу йәйге ярҙарына ҡайтҡан. Йылға аръяғындағы донъя ауыл яғындағына ҡарағанда икенсерәк: бында ерек, муйыл ағастары, ҡомалаҡ сырмаған балан, энәлек, ҡарағат - ағы ла, ҡыҙылы ла, урыны менән сәнскеле гөлйемеш тә үҫә. Ярҙан эскәрәк инһәң - түңгәкле һаҙлыҡ. Унан да ары - кеше йөрөмәгән ерҙәр, унда хатта йәй көндәрендә лә инмәйҙәр. Ниндәйҙер тауыштар ишетелә, кемдер үгеҙ ише мышнай, уфылдай, торналар торҡолдай, кемделер үсекләгән йәки кемгәлер асыуланған һымаҡ һайыҫҡандар шыҡырыҡлай.

Ҡарағат емештәре ваҡ һәм йәп-йәшел, әсе ине. Малайҙар ашарға кереште. Ашаған һайын ашағылары килә.

- Рифат, кил әле бында! - тип һөрәнләне ҡапыл Азат. - Ҡара, нимәлер ята!

Дуҫының тауышына ашығып килгән Рифат ниндәйҙер сәйер еҫ тойҙо. Ундай еҫте ул бығаса бер ҡасан да тойғаны юҡ ине. Һәм ҡыҙыл ҡарағат янына килеп еткәс, үләндә йоҡлап ятҡан Кинйәкте күрҙе.

- Үлгән, - тине Азат, ҡурҡып.

Кинйәк хәрәкәтһеҙ ята ине, йөҙөндә - аптырау ғәләмәте. Күҙҙәре асыҡ, әйтерһең дә, йөҙө тапҡырында элеүле торған ҡарағат төлгәшенә ҡараған.

- Әйҙә, ҡайтайыҡ, Сафия апайға әйтәйек!

Улар йүгерешеп ҡайтып, Сафия апайға әйттеләр ҙә өсәүләшеп кире килделәр. Сафия апай, улына текәлеп, малайҙар иғтибарға алмаған ҡарағатҡа төртөп күрһәтте: ауыҙ ситтәрендә, муйын тирәһендәге күлдәгендә ашҡаҙанында эшкәртелеп бөтмәгән йәшел ҡоҫҡолоҡ ҡатҡайны.

- Ас көйө ҡарағатты күп ашаған, - тине Сафия апай. - Йөрәге түҙмәгәндер.

Ул ауылға ҡайтып, киндер сепрәк алып килде. Ярым кипкән мәйетте шуға төрҙө лә зыяратҡа алып китте. Өләсәһенең ҡәберенә йәнәш тәрән булмаған соҡор ҡаҙҙы һәм буденовкаһын башына кейҙереп, улын ерләне. Шулай итеп, малайҙар бригадаһының етәксеһе, һәр төрлө ҡыҙыҡлы уйындар, мәҙәктәр уйлап сығарыусы Кинйәктән бәләкәй генә бер ҡалҡыулыҡ хасил булды...

* * *

Бесән мәле етте. Һуғышҡа тиклем бесән сабыу, уны йыйып кәбәнгә һалыу ололар өсөн йәйге ураҡ төҫлө, ә малайҙар һәм үҫмерҙәргә йәйге байрам кеүегерәк була торғайны. Сөнки күмәкләп ярыша-сәмләнә эшләү күңелле. Һыбайлап ат һуғарырға бараһың, йылғаға яҡын кәбәнлә-

***✓ Ашнаҡсы булып бригадирҙың ҡатыны Мәһирә эшләй. Ул арыш ононан бешерелгән туҡмасты малайҙарҙың сеүәтәһенә һала. Ҡорһаҡтарын өйрә менән тултырған, әммә туймаған малайҙар берәй нәмә эҙләп, тирә-яҡҡа таралыша.***



һәләр инде төшкә туҡтаған арала һыу инәһең, балыҡ тотаһың. Ул саҡтарҙа йәй йылы, хатта эҫе, һыу ҙа яңы һауылған һөт һымаҡ йылы, төндәр ҙә һыуыҡ булмай. Ашау ҙа етерлек: йылҡы ите бешерәләр, ҡымыҙ бирәләр. Кистәрен арбаларға тейәлеп ауылға ҡайтҡанда ҡатын-ҡыҙ күңелле йырҙар йырлай, таҡмаҡтар әйтә, ирҙәр ҡәнәғәт йылмая...

Енеү йылы йәйендә кәбәндәрҙе элекке туғайҙарҙа ҡойҙолар. Әммә һуғышҡа тиклемге ирҙәр бригадаһы юҡ ине. Һуғыш йылдарында тартылған балалар ғына һәм ҡатыны менән ҡарт бригадир Шәрифулла. Ә бала-сағаны эшләтер өсөн түгел, күпселектә саф һауала эҫтәренә әҙ булһа ла бригада өйрәһе төшһен өсөн алалар. Малайҙар көстәренән килгәнсе тырыша. Рифат менән Азат кәбән төбөнә һөйрәткестә бесән ташый, Мөбәрәк, Вәсим ҡойолғанды тырмап йөрөй. "Таҙараҡ йыйығыҙ, артығыҙҙан ҡалдырмағыҙ! - тип мыжый бригадир, шунан тәрән көрһөнөп, үҙ алдына әйтеп ҡуя. - Эх, һеҙ, малайҙар, малайҙар, колхоз булмаһа, нишләр инегеҙ?"

Ашнаҡсы булып бригадирҙың ҡатыны Мәһирә эшләй. Төшкөһөн ул арыш ононан бешерелгән туҡмасты малайҙарҙың сеүәтәһенә күберәк һала. Ҡорһаҡтарын өйрә менән тултырған, әммә туймаған малайҙар, аттар ашаған, ҡарттар ял иткән арала ашарлыҡ берәй нәмә эҙләп, тирә-яҡҡа таралыша. Йылғаға яҡын эшләһәләр - ҡарағат ҡыуаҡлыҡтарына, ҡалҡыулыҡтар тирәһендә булһа - еләккә.

Хәҙер ҡатындар туғайҙан ауылға йырламай ғына ҡайта. Ә Рифат өйөнә яҡынлаған һайын бер генә уй-өмөт менән бага: бына өй тапҡырында арбанан төшөп ҡалам, ҡапҡа төбөндә атайым баҫып тора. Мин уға ҡурайҙа әсәйем йырлаған көйҙәрҙе уйнаясаҡмын...

* * *

Оҙон йәйҙә ауылға ярсыҡлы опуля аҡтарған ҡулын аҫып, Ишбулат Сабитов ҡына әйләнеп ҡайтты. Бүйға бәләкәй һәм ауылда берҙән-бер һарыҡай егет ине ул. Бер ваҡытта ла атаһы булманы. Аҙашып килеп сыҡҡан ниндәйҙер старатель күпмелер ваҡыт уның әсәһендә йәшәне лә "орлоғон" ҡалдырып китте. Үҙенең кәмселеген белгәнгәмелер, Ишбулат торғаны бер һуғыш сукмары, эре һәм тәкәббер ине. Ҡыҙҙар уны яратманы, егеттәр аралашмаҫҡа тырышты, ситләү уҙҙы. Мәктәптә уҡығанда уҡ үҙенең класташы Нәжибәне яратты, әммә ҡыҙ уны иғтибарға ла алманы, мыҫҡыллап көлдө, һары гәрип, тип атаны. Һәм бына ул, кәүҙәгә саҡ ҡына күтәрелгән, түшенә миҙалдар ҡаҙаған, ҡулы яралы егет булып ҡайтып килде.

Бер ваҡыт ул эскән көйө, һуғышта йөрөгәндә лә онотолмаған һағыш тәьҫирендә Нәжибәләрҙең өйөнә килде. Был мәлдә өйҙә ҡыҙҙар киске аулаҡта ултыра ине. Бер нисә ҡыҙ һикегә ҡунаҡлаған, шунда уҡ аҡ ашъяулыҡ өҫтөндә эмалле сәйнүк ултыра. Күрәһең, бал эсәләр.

Ишбулат күңелле генә иҫәнләште, әммә шундуҡ Нәжибәнең яуабы яңғыраны:

- Ниңә килдең? Беҙ һине саҡырмағыҡмы?

Быйылай ҡабул итеүҙән аптыраған Ишбулат ишек яғына боролайым ғына тигәйне, йәмһеҙ, йәҙә шаҙра Мәрзиә ҡалҡынды ла:

- Ниндәй егеттәр ятып ҡалды, ә был гәрип... ҡайтҡан, - тине.

Кемдер мыҫҡыллы һөйләнде, кемдер хихылданы.

Ишбулат фронттан Нәжибәгә бер нисә хат яҙып, яуап ала алмағайны. Бына әле эсендә ятҡан шул үпкәһе лә ҡуҙғалды, асыуы алҡымына тығылды: "Улар мине, фронтовикты, "За отвагу!" миҙалы алған һалдатты нисек ҡаршылай, мыҫҡыл итә... Тегендә, алғы һыҙыҡта, мин нимәләр генә күрмәнем..." һәм ул түҙмәне, әйләнде лә, бер тынала нимә уйлағанын әйтте ташланы:

- Ах, һеҙ, сукалар! Эйе, мин гәрип, әммә мин - бөтәгеҙгә бер үҙем. Теләһәм - һәр ҡайһығыҙҙы баҫа алам! Ә һин, Нәжибә, һоратырға килгәндер тип уйлайһыңмы? Көт, был бер ҡасан да булмаясаҡ! Кейәүгә сыға алмай ҡарт ҡыҙ булып ултыраасаҡһың!

Нәжибә һикенән төштө, өндәшмәй генә Ишбулат эргәһенә килде лә, трактористың тупаҫланған ҡаты йоҙроғо менән тегенең сикәһенә һуҡты. Ишбулат сайҡалып китте, һау ҡулы менән йөҙөн ҡапланы ла ишекҡә боролдо. Нәжибәнең икенсе һуғыуы уны тупһала ҡыуып етте. Ишбулат әләгеп һөрләктә лә йығылды.

- Ҡыҙҙар, туҡмағыҙ!

Ҡыҙҙар берҙәм рәүештә һикенән төштө лә иҙәндә ятҡан һалдатты туҡмарға тотондо. Ялан аяҡтары менән йән еренә эләктерергә тырышып типтеләр, ҡулдары менән башын, арҡаһын төйгөсләнеләр...

"Киске аулаҡ"тан һуң Ишбулат бер ай район больницаһында ятып сыҡты, ә Нәжибәне фронтовикты туҡмағаны өсөн бер йылға Белорет төрмәһенә ултырттылар...

* * *

Август иртәләренең береһендә Рифатҡа бригадир Шәрифулла менән Камилә килеп инде. Апаһын күргәс, малай һағайҙы - йәнә үҙенә йәшәргә алып ҡайтырға килгәнме?

- Тор, кейен, - тине апаһы.

- Ниңә? - тип яуапланы Рифат, саҡырһа ла уларға бармаясағын хәл итеп.

- Детдомға бараһың. Бына Шәрифулла ағай алып бара.

- Мин бер ҡайҙа ла бармайым! - тип өҙә һуҡты Рифат.

- Улым, был - приказ. Приказдың нимә икәнен һин беләһеңме? Бынан ары һин приказ буйынса ғына йәшәйәсәкһең, - тине бригадир. - Давай, һалдат кеүек йәһәт кенә йыйын!

Рифат теләр-теләмәҫ кенә одеял аҫтынан сыҡты, пальтоһын кейҙе, сарыҡтарын аяғына тартты, йомшайып бөткән фуражкаһын башына һалды. Ҡурайын да алғайны, апаһы асыуланды:

- Ул һыҙғыртҡысыңды нимә тип алаһың? Унда ҡурай уйнап ултырырға ваҡытың булмаҫ. Уҡырға тейешһең һин унда.

Рифат өндәшмәне, әммә ҡурайын ҡалдырманы. Киткәндә ул бер ниндәй үкенес тә, ҡайғыырыу ҙа кисермәне. Ныҡлап уйнып етмәгәнлектән, ул үҙенең малайҙар бригадаһы һәм бала саҡ йылғаһы менән мәңгегә айырылышҡанын аңламай ине...

**Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.**

**(Аҙағы. Башы 1-4-се һандарҙа).**

## ӘЙҘӘГЕҘ, ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!



# ОЙОШМА КӘРӘКМЕ?

**"Киске Өфө" гәзитенең 2-се һанында донъя күргән мәҡәләһендә танылған шағир Тимер Ниәтшин заманыбыҙ яҙыусылары алдында торған бик урынлы һорау күтәрә: кем ул яҙыусы, уның төп вазифаһы ниндәй булырға тейеш?**

Ысынлап та, бөгөн күптәрҙең башында "Ә Яҙыусылар берлеге, ғөмүмән, кәрәкме ул?" тигәнерәк һорау ҡайнай. Ысынлап та, элеккесә, дәүләт тарафынан ҡуйылған ижтимағи заказ һәм тейешенсә финанслау булмағас, ойошманың бер кемгә лә кәрәге юҡ һымаҡ тойолоп китә. Ошо сәбәпле китаптар баҫтырып сығарыу ауырлаша, яҙыусыларҙың ижади кисәләрен уҙғарыу, йәш шағир-яҙыусылар тәрбиәләү һәм башҡа байтаҡ эштәр тулыһынса атҡарыла алмай. Ҡыҙғаныс, әлбиттә... Ни тиһәң дә, рух һәм әҙәп тигән төшөнсәләрҙе элек китаптарҙан, әҙәби әҫәрҙәрҙән ала торғайны бит халыҡ. Ә бөгөн шул шишмә лә ҡороп бара... Шулай була ҡалһа, иң кәмендә Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов кеүек шәхестәр тыуҙыра алған милләттең әллә күпме мөмкинлеген юғалтасаҡбыҙ. Сөнки, ни тиһәң дә, бер урында тупланған юғары профессионалдар йәш талантларға баһалап бөткөһөҙ дәрестәр бирә ала бит.

Шул уҡ ваҡытта Яҙыусылар берлеге тирәләй ҡуйырған ысынбарлыҡҡа ла шатланып булмай. Шуға ла, "Яҙыусылар берлеге кәрәкме?" тигән һорауға, бәлки, "Һәр хәлдә, быйылай формала түгел", тип яуап ҡайтарырғалыр. Ә уның эшен үҙгәртеп ҡороу киләсәкте күрә, заманса фекерләй белеүсе, бөтөн күңеле менән башҡорт әҙәбиәтенең киләсәге, талантлы әҙиптәре, ойошманың эше өсөн яныусы кешенең генә ҡулынан килерҙәй бурыс икәнен дә танымай булмай.

**Мансур ҠАҘАҠАЕВ.**

# ЙЫЛЫ МӨХИТ ҺАҠЛАНҺЫН...

**Башҡортостан Яҙыусылар берлегенә беренсе тапҡыр килеүем хәтеремә ныҡ уйылып ҡалған. Бик теләһәм дә, оҙаҡ ваҡыт икеләнеп, унда барырға ҡыймайыраҡ йөрөгәйнем. Ниһайәт, шиғырҙарымды туплап, Яҙыусылар берлегенә юғайланым. Мине ул саҡта әҙәби консультант булып эшләүсе Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина ҡабул итте. Ҡайҙа уҡыуым, тыуып-үҫкән ерем, ниәттәрем тураһында ҡыҙыҡһынып һорашты. Аҙаҡ: "Шиғырҙарыңды ҡарарбыҙ, килеп йөрө!" - тип йылмайып оҙатып ҡалды. Шундағы ҡанатланып, күңелем үҫеп сығыуым!**

Икенсе ҡабат Яҙыусылар берлегенә уҡытыусыбыҙ Зәйтүнә Шәрипова алып барҙы. Осрашыу барышында өлкән әҙиптәр беҙҙең - бер төркөм студенттарҙың шиғырҙарын тыңлап, баһа бирҙеләр. Баларса бер ҡатлы, сейле-бешләрәк яҙмаларыбыҙҙы ҙурлап, кәңәштәр әйттеләр.

Шул осорҙан инде 5-6 йыл ваҡыт үткән. Нисәмәләр, ниндәй һорауҙар менән генә килмәнем ойошмаға ошо арауыҡ эсендә! Уны етәкләгән кешеләр ҙә үҙгәреп торҙо. Р. Бикбаев, А. Юлдашбаев, Ҡ. Аралбай, Р. Тойғон, Ф. Ғөбәйҙуллина, Н. Ғәйетбай... Бер нәмә генә үҙгәрешһеҙ һаҡланды - мин бында һәр саҡ йылы һүҙ, кәрәкле кәңәш ишеттем. Шуның өсөн ҙур рәхмәтлемен бында эшләгән кешеләргә. Ваҡытында күрһәтелгән ышаныс, әйтелгән дәртләндереү һүҙҙәре артабан осраған ҡаршылыҡтарға бирешмәҫкә, әҙәбиәттән, ижадтан ситләшмәҫкә булышлыҡ итте.

Һуңғы осорҙа һүҙ сәнғәтенең баһаһы тағы ла күтәрелә кеүек. Тимәк, әҙәбиәтебеҙгә лә йәштәр киләсәк әле. Яҙыусылар берлегендә уларҙы ла ишетә һәм аңлай белгән, итәғәтле кешеләр ҡаршылаһасы! Сөнки әле генә әҙәбиәт юлына баҫҡан ижадсы өсөн тәүге профессиональ анализ, тәнҡит тә, яҡшы мөнәсәбәт тә бик мөһим. Ойошма менән артабан кем етәкселек итһә лә, ундағы йылы мөхит, кешелеклелек һаҡланһын ине.

**Олеся ӘХМӘТРӘХИМОВА.**

# ҺҮҘ ӨСӨН ЯУАПЛЫЛЫҠ

**"Киске Өфө"нөң 2-се һанында Тимер Ниәтшиндың "Яҙыусы вазифаһы - ул рух һағындағы яугир" исемле мәҡәләһен уҡып сыҡтым. Яҙыусылар берлегенең буласаҡ етәксеһенә түгел, ә барса яҙыусы халҡына әйтәһе һүҙем бар: рух һағындағы яугирҙарыбыҙ динебеҙҙе лә белергә тейеш!**

Мәҡәләлә автор "Яҙыусы - һүҙ оҫтаһы, шуға ла һүҙ менән үтә лә һаҡ эш итергә бурыслы..." тип яҙған. Дин ғилеме менән яҡындан таныш кеше булараҡ, яҙыусының бына шул һүҙҙәренең динебеҙ ҡанундарына ифрат та тап килеүе хаҡында әйтер инем. Ислам дине талаптарына ярашлы, әҙәм балаһы һәр ҡылған ҡылығы өсөн генә түгел, ә һәр бер әйткән һүҙе өсөн дә ахирәттә тулыһынса яуап бирәсәк. Был талап киң мәғлүмәт сараларында сығыш яһаусы һәр авторға, айырыуса профессиональ яҙыусыларға ҡағыла. Кеше ышанырлыҡ итеп, матур телдә яҙылған бөгөн мәҡәләләрҙә динебеҙгә бәйле, әммә йыш ҡына Ислам дине ҡанундарына тап килмәгән факттарҙың осрауы күңелде ҡыра. Диндә ҡасандыр, кемдәндер ишеткән имеш-мимештәр аша ғына белгән авторҙарҙың әҫәрҙәре шунда уҡ күҙгә ташлана. Дин - ул бик етди фән. Уны бер ултырғанда ғына, йәиһә унан-бынан ишеткән мәғлүмәттәр аша ғына өйрәнеү мөмкин түгел. Диндә лә, философия фәнендәге һымаҡ, иркен фекерләүҙәр, үҙенсә һығымталар яһауҙар рөхсәт ителәләр, тип хаталана бәгеләр. Изге Ҡөрьән - Аллаһы Тәғәлә китабы, ә Бәйғәмбәр сөннәте - Аллаһ илсеһенең әйткән һүҙҙәре һәм ҡылған эштәре. Бына шул ике сығанаҡҡа ғына таянған хаҡ дин ҡанундарын һәр ҡәләм оҫтаһының иң ябай ғына кимендә булһа ла белеүе теләр инем. Уларҙы ярайһы яҡшы белгән яҙыусыларыбыҙ ҙа бар. Ана шундайҙарҙың "Ҡөрьән Кәримдә Аллаһы Тәғәлә бына шулай тип әйтә", йәиһә, "Бәйғәмбәребеҙ шулай-шулай тип әйткән", тигән дөрөҫ кенә һүҙҙәре бәгеләр бер әҫәрҙәрҙә күренеп ҡалыуы һөйөндөрә.

Гәзит-журналдарҙа яҙылғандарға кеше ышанып барыусан. Хәҡиҡәттә һөйләһә лә, дөрөҫ булмаған нәмәне һөйләһә лә. Һүҙ юҡ, сәйәсәт, иҡтисад, көнкүреш һәм башҡа өлкәләрҙә, ил эсендә һәм донъя күләмендә барған хәл-ваҡиғаларҙа яҙыусыларыбыҙ барыһы ла ифрат та яҡшы белемлеләр. Тел тураһында хатта әйтеп тораһы ла түгел. Ә дини тарафта беҙ мәшһүр Аҡмуллабыҙ, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һымаҡ динебеҙҙе яҡшы белгән мәғрифәтселәребеҙҙән мотлаҡ үрнәк алырға тейешбеҙ. Дин нескәлектәрен мәҙрәсә белеме булған Бабич, Туҡай, Ғафури һәм башҡа ул осор әҙиптәребеҙ ҙә бик яҡшы белгән. Беҙҙең дәүергә, әлбиттә, дини уҡыу тура килмәне, әммә был беҙгә, динебеҙҙе белмәһәк тә ярай, тигәнде аңлатмай. Әҙәм балаһы иң беренсе нәүбәттә белергә тейешле хаҡиҡәтте өйрәнмәү рух һағында торған яугирҙарыбыҙға һис кенә лә килешмәҫ. Иман шарттарын, Ислам дине терәктәрен, тәүхид фәнен, бәйғәмбәрҙәр тарихын һәр яҙыусы ярайһы ғына белеп, шунан ғына дин хаҡында үҙ фекерен сағылдырырға тейеш.

Яҙға ҡарай үткәрергә ниәтләгән Яҙыусылыр берлегенең ҡорона, унан башҡа тағы ниндәйҙер сараларға мотлаҡ Ислам университетынан дин белгесен саҡырып, уға һүҙ бирергә кәрәклеген тәҡдим итергә уйым. Шундай етди сараға хатта мөфтөй хәҙрәттең үҙен саҡырыу ҙа ҡамасауламаҫ ине.

**Сынтимер ШАФИҠОВ.**

***✓ Даими рәүештә ейәндәрен ҡараған йәки балалары менән тығыҙ аралашып йәшәгәндәр яңғыҙлыҡты үҙ итеүсе тиҫтерҙәренән ҡарағанда яҡынса 5 йылға оҙағыраҡ йәшәгән. Тик был хәстәрлек ҡыуаныс килтерергә тейеш.***



ИНТЕРНЕТТАН



# СТУДЕНТ ТА...

## башҡа хәҙер

■ Матдәләр алышыныуҙы тиҙләтеү - көүҙәне һомғол тотоуҙа ҙур роль уйнай. Кемгәлер был нәҫелдән бирелә. Ир-егеттәр, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда калорияларҙы тиҙерәк яндыра. 40 йәште үткәс, күптәрҙең метаболизмы яйлай. Ғалимдар билдәләүенсә, беҙ хатта тик ултырғанда ла, организм калорияларҙы яндырыуын дауам итә. Кемдең мускулдар массаһы күберәк, уларҙы матдәләр алышыныу тиҙлеге лә ҙурыраҡ. Сама менән иҫәпләгәндә, 500 грамм мускул тұҡымаһы көнөнә 6 калория тотона. Шул уҡ ваҡытта, 500 грамм май көнөнә 2 калория ғына яндыра. Шуға ла мускулдарҙы үҫтерегеҙ. Калорияларҙы эшкәртеү өсөн организмға һыу кәрәк. Һыу етешмәй башлаһа, матдәләр алышыныуы шунда уҡ яйлай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә 6-8 стакан һыу эсергә кәрәк.

■ Шәкәр - баш мейеһе өсөн төп энергия сығанағы. Дөрөҫөрәге, шәкәр һәм углеводтарҙан барлыҡҡа килгән глюкоза. Шуға ла тәм-том ашағандан һуң баш яҡшыраҡ эшләй башлай. Әммә был ваҡытлыса ғына тәьҫир. Шәкәр артыҡ булһа, киреһенсә, хәтер насарая, кеше үҙен хәлһеҙ тоя. Шуға ла шәкәр артыҡ ауырлыҡҡа алып килмәһен өсөн, уны сама менән ҡулланырға кәрәк. Баш мейеһе эшмәкәрлегенә омега-3 кислотаһы ла яҡшы тәьҫир итә. Ул инсульт, аҡыл еңеләйеүҙән һаҡлай, хәтерҙе нығыта, йөрәккә лә файҙалы, хатта простата яман шеше хәүефен дә түбәнәйтә. Омега-3 балаларҙа астма булдырмай. Был майлы кислота балыҡта күп. Халҡыбыҙҙың традицион туҡланыуына әйләнеп ҡайтһаҡ, омега-3 ҡаҙылыҡта бар.

■ Астма менән яфаланыусыларға ветчина, колбаса һәм уға оҡшаш башҡа ризыҡ ашарға ярамай. Америка һәм Европа ғалимдары яңы тикшеренеүҙәр уҙғарып, ошондай фекергә килгән. Унда мендән ашыу кеше ҡатнашҡан. Уларҙың тоҙло ит һәм колбасалар менән туҡланыуға өҫтөнлөк биреүсе 75 процентында астма сире асыҡланған һәм ул аҙа ғына барған. Колбасаны аҙнаһына бер тапҡырға тиклем сикләү ҙә ярҙам итмәй, ти ғалимдар. Унан тулыһынса баш тартыу кәрәк.

■ Эргә-тирәләгеләргә ярҙам итеү, улар тураһында хәстәрлек күреү ғүмерҙе оҙайта. Ғалимдар 19 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәһен иғлан иткән. Даими рәүештә ейәндәрен ҡараған йәки балалары менән тығыҙ аралашып йәшәгәндәр яңғыҙлыҡты үҙ итеүсе тиҫтерҙәренән ҡарағанда яҡынса 5 йылға оҙағыраҡ йәшәгән. Тик был хәстәрлек ҡыуаныс килтерергә тейеш, ти белгестәр.

■ Ас студент тигән төшөнсә үткәндә тороп ҡалды, ти Америка ғалимдары. Фән менән шөғөлләнеүсе йәш кешеләрҙә һимеҙлек йышыраҡ күҙәтелә. Америка студенттары колледжда 4 йыл белем ала. Әгәр ҙә уҡый башлаған ғына осорҙа 23 процент егет һәм ҡыҙ һимеҙлектән яфаланһа, уҡып бөткән мәлдә ундайҙарҙың һаны 41 процентҡа етә. Уртаса 4 йыл эсендә студенттар 4,5 килограмм ауырлыҡ йыя. Билдең артыҡ йыуанайыуының сәбәбе ғәҙәти - уҡыуға һәм социаль тормошҡа баштан сумған йәштәр йәшелсә кеүек файҙалы ризыҡтар менән туҡланмай һәм спорт менән шөғөлләнмәй.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**"Эштән ҡайтышлай, юл ыңғайы магазинға инеп һыра ғына алам да, киске аш ваҡытында бер шешәне бушатып, көн дауамында йыйылған арыуҙан, көсөргәнештән ҡотолам..." "Мин бит араҡы эсмәйем, һыра ғына эсәм", - тип, үҙенең алкоголле эсемлек ҡулланыуын аҡларға тырышҡан күптәрҙән ошо фразаны йыш ишетергә тура килә, шулай бит? Ул ысынлап та хәүефһеҙ эсемлекме? Был һорауҙы 5-се дауахананың профилактика бүлеге мөдире Наталья БРАЖНИКОВАға юлланыҡ.**



# КИЛӘСӘГЕБЕҘГӘ СПИД ТҮГЕЛ...

## һыра алкоголизмы янай

**➔ Айыҡ тормошто хуплаусылар һәм собриологтар хәмерҙең генә түгел, алкоголле башҡа эсемлектәрҙең, шул иҫәптән һыраның да зыяны тураһында даими тылҡып тороуға ҡарамаҫтан, уны ҡулланыусылар һаман арта бара...**

- Ғәмәлдә, һыра алкоголизмы кешене тынысландырған, арығанлығын бөтөргән һымаҡ булып, ялған эффект тыуҙырып, аңды томалай һәм алдатҡыс тойғолар барлыҡҡа килтерә. Күпселек фекеренсә, һыра - ул, йәнәһе лә, бөтөнләй алкоголь түгел, уны ҡулланыу кешелә хәмер эсеү ихтыяжы кеүек хәүеф тыуҙырмай. Әммә һыра алкоголизмы, хәмер алкоголизмына ҡарағанда ла ҡурҡынысыраҡ, ул яйлап, аҫтыртын формалаша. Ә инде барлыҡҡа килгәс, алкоголизмдың иң ауыр формаларына килтерә.

**➔ Кеше - аңлы йән эйәһе. Шуға ҡарамаҫтан, уның тыйылған емеште лә татып ҡарағаһы килә, икенсе яҡтан, сауҙа двигателе булған реклама ла уның аңына йоғонто яһай, тиҙәр. Был, ысынлап та, шулаймы?**

- Әлбиттә, реклама технологияһын яҡшы белеүселәр уның ни осраҡта һәм ҡайһы ваҡытта нығыраҡ тәьҫир яһауын яҡшы аңлап эш итә. Һөҙөмтәлә һыра алкоголизмы артыуға реклама ҙур йоғонто яһай. Тирә-яҡҡа иғтибарлап күҙ һалһаҡ, нимә күрәбеҙ - бер генә сара ла эсеүҙән башҡа үтмәй. Тик шуны оноторға ярамай: Рәсәй халҡының билдәле бер өлөшөндә, бигерәк тә элек-электән үҙ традициялары менән йәшәгән ерле халыҡта, алкоголизмға бирешеүсәнлек кимәле ҙур. Бында Башҡортостанды ла индерергә мөмкин, сөнки былтыр "ФедералПресс" мәғлүмәт агентлығы менән Стратегик коммуникациялар һәм социаль проекттар институты берлектә ойошторған тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, Рәсәйҙең иң эсеүсе ҡалалары араһында Өфө икенсе урында тора, тип билдәләнде. Ә инде һыра ҡулланыу буйынса 12-се урында, йәғни йылына 32631,4 тонна һыра һатыла, был йән башына, яңы тыуған балаларҙы ла индереп, 29,7 литр тура килә тигән һүҙ.

**➔ Бөгөн медицинала төрлө янынан-яңы ауырыуҙар килеп сығып ҡына тора. "Рәсәйҙең йәш быуынын СПИД бөтөрәсәк", - тигән фекерҙәр ҙә ишетелеп ҡала. Бындай фекерҙәргә ниндәй ҡараштаһығыҙ?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәйҙең киләсәген СПИД түгел, ә һыра алкоголизмы бөтөрәсәк. Бөгөн йәштәр мөхитендә иң ҡурҡынысы булып һыра һәм алкоголле коктейлдәр тора. Ә эскелеккә ҡаршы көрәшеүселәр араҡы һатыуҙы кәметәйек, тип лаф ора, һыра менән коктейлдәр тураһында - ләм-мим. Һыра ҡайнатҡанда, хатта алкоголһеҙ һыра булһа ла, уға ҡомалаҡ ҡушалар. Ә ҡомалаҡ - наркотик матдә, киндерҙең яҡын ғына туғаны. Һыра ҡайнатҡанда фитоэстроген тип аталған матдә ҡайнатыла. Әгәр ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙан организмында тестостерон, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәрҙән эстрадиол гормоны булыуы менән айырылһа, һыра эскән ирҙәрҙең ашҡаҙанында фитоэстроген эстрадиолға әйләнә. 17-20 йыл туҡтауһыҙ һыра эскән ир-атҡа 100 процент импотентлыҡ гарантиялана.

Ҡатын-ҡыҙ һыра ҡулланғанда картина тағы ла ҡурҡынысыраҡ төҫ ала. Уның ашҡаҙанында шундай уҡ ябай ғына химик реакция барлыҡҡа килеп, эстрадиол гормоны күбәйә. Ҡатын-ҡыҙ гормонының саманан тыш күбәйеүе уны агрессив, асыулы йән эйәһенә әүерелдерә.

Шул уҡ ваҡытта һыраны йыш эсеү - хроник алкоголизм формалашыуға иң ҡыҫҡа юл. Күп күләмдә ул күҙәнәккә ағыу булып тәьҫир яһай, шуға күрә уны ҡулланыу миокардиодистрофия, бауыр циррозы, гепатит кеүек ауыр эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. Һыра алкоголизацияһы ваҡытында хәмер алкоголизацияһына ҡарағанда баш мейеһе күҙәнәктәре нығыраҡ зарарлана, һөҙөмтәлә интеллект кәмей, ауыр психопатик үҙгәрештәр асыҡлана. Ҡайһы берҙә сирле бауыр йәки ҡан әйләнеше боҙолоуы, "һыра йөрәге" күҙәтелгән ауырыуҙар арта.

Һыра ҡан тамырҙарын бик тиҙ тултыра, был веналар варикозына һәм йөрәк сиктәре киңәйеүенә килтерә. Шулай "Һыра йөрәге" синдромы барлыҡҡа килә, йәғни "капрон ойоҡ" синдромы - йөрәк һәленә, бәлтерәй һәм ҡанды насар ҡыуа.

**➔ Тимәк, һыра аҫтыртын хәүеф сығанағы...**

- Эйе, ул беҙҙе ҡол яһап, хужа булырға ынтыла. Бөгөн күпме һыра эсһәң, алкоголик булмаясаҡһың, тигән күләм критерийҙары бөтөнләй юҡ. Шуға күрә, үҙегеҙгә һәм сәләмәтлегегеҙгә иғтибарлы булығыҙ, әгәр проблема килеп тыуған икән, тиҙ арала үҙегеҙ йәки белгес ярҙамы менән унан арынығыҙ.

Бөгөн - сәләмәт, уңышлы, матур булыу модала. Был төшөнсәләр алкоголь менән йәнәш йөрөмәй. Барыһы ла үҙ ҡулығыҙҙа, һыраһыҙ ҡулығыҙҙа.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

ӘЙ, ЯҘМЫШ...

# КҮҢЕЛЕ МЕНӘН...

## бар донъяны ишетә



**Бынан ике тиҫтәнән ашыу йыл элек гүзәл тәбиғәтле Хәйбулла районы Вәзәм ауылында ғаиләлә икенсе бала булып бер матур ҡыҙ бала донъяға килә. Атаәсәһе, Сәлихә һәм Айҙар Суриндар, уға Сулпан тип яратып исем ҡуша. Башҡа балаларҙан бер ҙә айырылып тормаған Сулпан шуҡ, шаян, теремек булып үҫә. Ауылдың бөтмәҫ-төкәнмәҫ эше менән мәшғүл булған атай-әсәй уның ишетеү һәләтенән мәхрүм икәнен ике йәшендә генә белеп ҡала.**

- Туған тейешле бер кешебеҙ дауаханала эшләй ине. Бер мәл ул Сулпаныбыҙҙың ишетмәгәненә иғтибар итеп, миңә әйтте һәм Өфөгә алып барып, тикшертергә кәңәш итте. Баш ҡалала тикшереү үткәс, Сулпанға ике яҡлы насар ишетеү диагнозы ҡуйҙылар. Баланың киләсәген ҡайғыртыу ниәте менән Аҡъярға күсеп килдек, ҡыҙыбыҙ балалар баҡсаһына йөрөнө. 8 йәше тулғас, Баҡалы районына махсус мәктәпкә уҡырға бирҙек. Программа ауырыраҡ бирелеү сәбәпле, был мәктәптә балалар башҡа балаларға ҡарағанда оҙағыраҡ уҡый. Сулпаныбыҙ би-

✓ *Барыһы ла тормошҡа ыңғай һәм бәхетле баҡҡан кешеләр менән аралашҡыһы килә, сөнки уларҙың мөнәсәбәте йоғошло. Хатта һеҙгә ауыр булғанда ла һәйбәт тип күрһәтергә тырышығыҙ.*



ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ҠӘҺӘРЛӘНГӘН ФИРҒӘҮЕН,

## йәғни Ҡөрьәндә һөйләнгән өс мең йыл элекке ваҡиға тураһында

**Боронғо донъя тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар боронғо Египетта үҙен алла тип иғлан иткән Фирғәүен тураһында яҡшы белә. Ҡөрьән-Кәримдең "Юныс" сүрәһендә был турала мәғлүмәт һәм һығымталар бар. Меңәрләгән йыл элек булған ҡот осҡос ваҡиғаларҙың дәлиле Англияның танылған Британиш музейында һаҡлана. Быяла аҫтында - йөҙтүбән йығылған мумия-кеше экспонаты. Музейҙағы башҡа мумияларҙан айырмалы, был мумияның бөтөн ағзалары ла, шулай уҡ сәстәре һәм һаҡалы ла нисек бар - шулай һаҡланған. Мәйет бер нисә аҙнала тарҡала икәне барыбыҙға ла билдәле. Ләкин был кешенең мәйете мең йыл үтһә лә, үҙгәрмәгән дә, тарҡалмаған да. Бының сере ниҙә?**



Был серҙе беҙгә изге Ҡөрьән асып бирә. Шуның менән был китаптың бөйөклөгө һәм Алланан икәнлеге тағы бер тапҡыр раҫлана.

Ҡөрьәндәге аяттарҙа Муса менән Фирғәүен көрәше һүрәтләнә. Муса бәйғәмбәр беҙҙең эраға тиклем 1200 йылдарҙа, йәғни өс мең йыл элек йәшәй. Ул замандарҙа ла изгелек менән яуызлыҡ алышҡан. Фирғәүен Мусаның иң яуыз дошманы булған. Бер ваҡыт Фирғәүен төш күрә. Йәнәһе, уның илендә тыуған бер малай, үҫкәс, уны тәхетенән бәреп төшөрәсәк. Шунан Фирғәүен илдә яңы тыуған бөтөн ир балаларҙы ла үлтерергә бойороҡ бирә. Әммә Хоҙай шул саҡта тыуған Мусаны үҙ яҡлауы аҫтына ала һәм уны аҙаҡ бәйғәмбәр тип иғлан итә. Ошонан һуң Фирғәүендең Хоҙайға асыуы тағы ла көсәйә.

Фирғәүен Мусаны һәм уның вариҫтарын - Бани Исраил ырыуы халҡын ныҡлап ҡыйырһыта башлағас, Хоҙай Мусаға һәм уның халҡына Египетты ташлап китергә тигән әмер ебәрә. Мусаның үҙенең ырыуҙаштары менән юлға сығыуын ишеткәс, Фирғәүен улар артынан ғәскәре менән ҡыуа китә (26-сы сүрә, 52,53-сө аят. 20-се сүрә, 79-сы аят).

Муса бәйғәмбәр һәм уның кешеләре, үҙҙәрен эҙәрлекләүселәрҙән ҡотолоп, Алла ихтыяры менән Ҡыҙыл диңгеҙ ярҙарына килеп етә. Алда дошман кеүек урғылып диңгеҙ ята, артта диңгеҙҙәй урғылып дошман ябырылып килә. Ошондай ауыр минутта Муса, Хоҙай ебәргән әмергә эйәреп, үҙенең таяғы менән диңгеҙгә киҙәнә. Шул мәлдә диңгеҙ икегә ярыла, ике яҡта ла бейек тауҙай диңгеҙ өйөлә, уртала юл barлыҡҡа килә. Муса бәйғәмбәр ошо юлдан үҙ халҡы менән атлап үтә (26-сы сүрә, 62-64 аяттар).

"Юныс" сүрәһендә был ваҡиға шулай һүрәтләнә: "Һәм беҙ Исраил балаларын диңгеҙ аша үткәрҙек, Фирғәүен һәм уның ғәскәре асыу һәм дошманлыҡ менән улар артынан ҡыуып китте. Ул бата башлағас: "Иман килтерәм мин, Исраил балалары иман килтергәндән башҡа илаһ юҡ, һәм мин - мосолмандарҙан!" - тине.

Әммә Аллаһы Тәғәлә быға саҡлы үҙен Хоҙайға тиңләгән Фирғәүендең тәүбәһен ҡабул итмәй. Киләһе аятта шулай тиелә: "Эйе, хәҙер! Ә һин элек буйһонманың һәм боҙоҡлоҡ таратыусыларҙан булдың". Шулай итеп, Хоҙай әмере менән улар һыуға бата.

Ошо уҡ сүрәнең 92-се аятында был ваҡиғаның дауамы һүрәтләнә. Аллаһы Тәғәлә һыуға батырылған Фирғәүенгә былай ти: "Һәм һинән һуң килгәндәргә аят булһын өсөн бөгөн Беҙ һинең кәүҙәң менән ҡотҡарабыҙ. Ысынлап та, күп кешеләр беҙҙең аяттарыбыҙҙан битараф!".

Эйе, Ҡөрьән ысынлап та Хоҙайҙан һәм Хәҡиҡәт тә унда ғына. Изге тәғлимәттәге бер генә фекер ҙә бығаса үҙ актуаллеген юғалтманы. Фирғәүен менән бәйле аяттарҙағы ваҡиғалар ҙа быға раҫ. Уның кәүҙәһе табылған урын үҙе үк Хоҙай тарафынан булдырылған мөғжизәнең дәлиле. Кәүҙә Ҡыҙыл диңгеҙ ярҙары буйында ер аҫтында һаҡлана. Инглиз тикшеренеүселәре уны эҫе ҡомлоҡтарҙа ҡаҙып ала һәм үҙҙәренә алып ҡайта. Мумияның йәшен билдәләү маҡсатында үткәрелгән тикшеренеүҙәр уны өс мең йыл тип билдәләй. Ул кеше Муса бәйғәмбәр заманында йәшәгән, тигәнгә раҫ был.

Тағы бер раҫлау шунан ғибәрәт: 1144 йылда донъя ҡуйған аз-Замахшарий тигән кеше Юныс сүрәһенең 92-се аятын тәфсирләп, үҙе үлгәндән һуң һигеҙ быуат үткәс табыласаҡ кәүҙәне һүрәтләй. Уның һүрәтләүҙәре иҫ киткес дөрөҫлөккә тап килә, әйтерһең дә, ул уны үҙ күҙҙәре менән күргән: "Һине диңгеҙ ярына бер тыныс ҡына урынға сығарып ташларбыҙ. Һинең кәүҙәңә боҙолорға бирмәбеҙ, ул һинән һуң бер нисә быуаттан тыуғандар ҙа күрһен һәм ғибрәт алһын өсөн бөтөн, һаҡланған, яланғас, кейемһеҙ булыр" (Кашшоффа тәфсире, 2-се том, 251-252-се биттәр).

Аяттағы раҫлауҙар һәм Ҡөрьәндең тәфсирҙәре кәүҙәнең мумияланмауы тураһында һөйләй. Билдәле булыуынса, мумиялағанда мәйеттең ҡайһы бер ағзалары алып ташлана, ә бында барыһы ла үҙ урынында.

Шулай итеп, Англия музейындағы йөҙтүбән йығылған Фирғәүендең кәүҙәһе беҙгә шуны иҫкәртә: беҙ бары тик Аллаға ғына табынырға тейешбеҙ.

---

решмәне, бар тырышлығын һалып уҡып, 12 класты тамамланы... - тип һөйләй әсәһе Сәлихә апай.

Үҙен йәлләтеп, кеше көнлө булып ултырырға теләмәй тырыш ҡыҙ, Өфөләге медицина колледжында насар ишетеүселәр өсөн махсус курсҡа уҡырға инеп, 4 йыл белем ала һәм шәфҡәт туташы һөнәрен үҙләштерә. Уҡыған саҡта үҙенең буласаҡ тормош иптәшен - Дмитрий Олейникты осрата. Йәштәр оҙаҡҡа һуҙмай, гөрләтеп туй үткәрә һәм бергә донъя көтә башлай. Шунан улар Сулпандың тыуған районына ҡайтып төпләнә. Сулпан Аҡъяр үҙәк район дауаханаһының лаборатория бүлегенә шәфҡәт туташы-лаборант булып эшкә урынлаша. Ире иһә Рәмил Билаловтың "Аҡъегет" ҡул эштәре оҫтаханаһында эш башлай.

Дауахананың бүлек мөдире Тимур Иштанов һәм коллегалары Сулпан тураһында тик яҡшы фекерҙә булыуын белдерә.

